ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

26-1 март - апрель (буранай - алағарай) 2016

№ 13 (691)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Битарафлыҡтан дауа бар микән?



3

Өфө хандары - кемдәр улар?



7

Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары...



халыҡты үҙен һаҡлап ҡалыуға берләштерә 8-9

Йәй ташы мажаралары



12

ТВ-программа 14

***Кешенең аҡыл туплауға өс юлы бар: уйланыуҙар юлы - быныһы иң изгеһе; башҡаларға оҡшарға тырышыу юлы - быныһы иң еңеле; үҙ тәжрибәң менән яуланған юл - быныһы иң ауыры.***

***(Конфуций).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Еребеҙ, һыуыбыҙ, тип күп яҙабыҙ, һөйләйбеҙ, ә асылда иһә бына ошо йәшәү сығанаҡтарыбыҙҙың ҡәҙерен беләбеҙме һуң?

***Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН, БДУ-ның Сибай институты Экология кафедраһы мөдире, биология фәндәре докторы, профессор:*** Ысынлап та, был хаҡта ни тиклем күберәк һөйләгән, яҙған һайын, кеше ундай өгөт-нәсихәткә күнегеп китә, күрәһең. Шуға ла беҙ ер-һыуыбыҙ ҡәҙерен баһалап бөтөрмәйбеҙ. Кешелектең генә түгел, башҡа төр бөтөн тәбиғи тереклектең төп йәшәү сығанағы булған был байлығыбыҙҙың ҡәҙерен белер өсөн ҡайһы саҡ сағыштырып ҡарау ҙа етә. Мәҫәлән, бер шулай Ҡытайҙа булғаныбыҙҙа беҙҙе крандан аҡҡан һыуҙы эсеү түгел, теш тә таҙарта күрмәгеҙ, тип алдан иҫкәртеп ҡуйҙылар. Баҡтиһәң, Шанхай һынлы ҙур мегаполиста крандарҙан аҡҡан һыу санитар-гигиеник талаптарға яраҡһыҙ, төрлө зыянлы химик матдәләргә бай булып сыҡты. Аҙаҡ ҡына беҙ бында һәм Ҡытайҙың башҡа ҡалаларында ҙур һауыттарға тултырылған һыуҙы һатып алып ҡулланыуҙарын үҙ елкәбеҙҙә татып белдек. Шунан үҙебеҙгә ҡайтып, рәхәтләнеп, тәмле һыуыбыҙҙы эскән саҡта нисек инде уның ҡәҙерен белмәйһең!

Сибай ҡалаһын алғанда, шуны әйтергә була: ул экологик таҙа урындарҙан сығанаҡ алған Ҡыҙыл йылғаһын "һыулай", крандаға килгән һыуҙы шикләнмәйенсә эсергә, башҡа төр хужалыҡ ихтыяждары өсөн файҙаланырға була. Әлбиттә, беҙҙең төбәк экологияһы, шул иҫәптән ер-һыуыбыҙ, ваҡытында баҡыр-көкөрт комбинаты эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә ярайһы ғына зыян күрҙе, ләкин бөгөнгө көндә Урал аръяғы райондарындағы экологик хәлде мин тейешле нормаларға ярашлы, тип баһалайым. Тик шуныһы: йылғаларыбыҙ һайыға, ҡарауһыҙ шишмәләр ҡорой. Был, әлбиттә, тотош алғанда еребеҙ сәләмәтлегенә, уның үҫемлектәр донъяһы, урмандарыбыҙ торошона бәйле ҡатмарлы глобаль мәсьәлә. Леспромхоздар бөтһә лә, урман ҡырҡыусылар бөтмәне. Киреһенсә, диләнкәләр шәхси ҡулдарға күсеп, күберәк аҡса эшләү, байығыу ҡомары туҡтарға уйламай ҙа әле. "Ирәндек" тәбиғи паркын булдырыу Хөкүмәт тарафынан хупланһа ла, был проект әлегә хыялда ғына йәшәй.

Башҡортостаныбыҙҙың һәр районында ла ҡурсаулыҡ итеп һаҡлап ҡына тоторлоҡ урындар бар. Башҡа берәй сит илдә бындай тәбиғи байлыҡтарға ҡараш, мөнәсәбәт тамырынан икенсе төрлө булыр ине. Ҙур-ҙур колхоз-совхоздар бөтөп, ерҙәребеҙ бәләкәй хужалыҡтарға, шәхси ҡулдарға тороп ҡалғас, ҡайһы бер ялан-ҡырҙар эшкәртелмәй ята, тигәнде лә күп ҡабатларға яратабыҙ. Был мәсьәләгә икенсе яҡтан да ҡарарға мөмкин бит әле. Был, бер яҡтан, ундай ерҙәр өсөн яҡшыраҡ та, тигән фекерҙәмен. Ергә лә ял кәрәк! Берәй 20 йылдан ул тулыһынса яңырып, аяҡҡа баҫасаҡ. Уны күпләп бәләкәй генә ағас үҫентеләре баҫа башлауы ла зыянға түгел: йылғаларыбыҙ тулы һыулы булһын өсөн урмандар ҙа беҙгә бик кәрәк. Кеше ҡулдары килтергән яраларҙан тәбиғәт ана шулай үҙ-үҙен дауалай һәм һауыға.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ӘСЕ ЛӘ, ТАҺЫҠ ТА...

## "Шаяниум"сыларҙың юмор күстәнәсе

**Кеше тормошонда юморҙың мөһим урын алып тороуы тураһында һәр заман зыялылары иҫкәртә. Донъяға юмор күҙлегенән бағыусылар бәхетлерәк, тип тә әйтәләр. Ә бына билдәле америка яҙыусыһы Марк Твен, юмор - фекер механизмын эшләтеп ебәреүсе, тип иҫәпләгән. Тимәк, көлә-шаяра белгән кешеләр тормошта барған төрлө хәл-ваҡиғаларҙы айыҡ аҡыл менән ҡабул итә, анализлай белә, негативтарға бик бирешеп бара һалмай. Тәжрибәле, оло кешеләр шулай. Ә балаларҙы, йәштәрҙе тормошҡа юмор күҙлегенән ҡарарға нисек өйрәтергә һуң? Баш ҡалала бынан ун дүрт йыл элек ойошторолған "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсы тап ошо маҡсатты күҙҙә тота ла инде: балалар тормоштоң төрлө күренештәренә ҡарата үҙ туған телендә, юмор аша мөнәсәбәтен белдерһен, баһа бирһен. Һәм маҡсатҡа өлгәшелә лә. Быйылғы миҙгелдең финал уйынынан алған тәьҫораттар шул хаҡта һөйләй.**

**(Дауамы 6-сы биттә).**




*"Башҡорттар.RU" командаһы Гран-при яуланы.*

**✓ Ҙур йылғаларҙың бәләкәй генә инештәрҙән юл алыуын онотмайыҡ шуға ла: шишмәләребеҙҙе һаҡлайыҡ, уларға тонсоғорға бирмәйек, юл асайыҡ, инеш баштарын көртәләп алайыҡ. Шунһыҙ йылғаларыбыҙҙың да ҡороп бөтөүе ихтимал.**



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АҠСА ЭШЛӘЙ БЕЛМӘҺӘҢ...

## ғилем тупла!

***Азат АЙЫТҠОЛОВ, ҡурайсы, Рәсәйҙең - атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты:*** Бөгөн һәр кемгә үҙ урынында үҙ эшен эшләп, милләткә файҙа килтереү тураһында ҡайғыртырға кәрәк. Халҡыңа тоғролоҡто, уға һөйөүҙе, ата-бабаларың аманатына хыянат итмәүҙе хеҙмәтең аша иҫбатлау мөһим. Халыҡ араһына сығып, һүҙ һөйләп йөрөүҙән бигерәк, милләттәштәреңә башҡарған ғәмәлдәрең менән матур өлгө күрһәтеү күпкә мәртәбәле. Әгәр ҙә һин үҙ эшеңде тейешле кимәлдә үтәһәң, үҫеп килгән быуын һиңә ҡарап шулай уҡ файҙалы эш менән шөғөлләнергә ҡарар итһә, тимәк, моратыңа өлгәшкәнһең була инде. Бары тик татыулыҡ, берҙәмлек һәм бер-береңә ярҙам ҡулы һуҙыу тураһында онотмаҫҡа кәрәк.

Һәр ваҡыт йәһүдтәрҙең бер мәҡәлен иҫкә төшөрәм: "Берәү менән дә көрәшергә кәрәкмәй, нимә өсөндөр көрәшергә кәрәк", - ти улар. Беҙгә уртаҡ маҡсаттар ҡуйып, дөйөм идея өсөн йәшәй башларға ваҡыт. Беҙҙең милләтте тик уртаҡ эш, уйҙар ғына ҡотҡарасаҡ. Бөгөн ошондай берләштереүсе милли идея үҙәгендә халҡыбыҙҙың рухиәтен, милли үҙенсәлектәрен, ауыҙ-тел ижадын һаҡлап ҡалыу мәсьәләһе торорға тейеш. Әгәр ҙә башҡорт аҡса эшләй, мөлкәт туплай белмәһә, белем алырға, ғилемле булырға ынтылһын. Сөнки бөйөк мәғрифәтсебеҙ әйтмешләй, "ғилемдәлер хөрәфәттәр". Аҡыллы һәм үҙ эшенең оҫтаһы булған кешегә һәр ерҙә лә юл асыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Еребеҙ, һыуыбыҙ, тип күп яҙабыҙ, һөйләйбеҙ, ә асылда иһә бына ошо йәшәү сығанаҡтарыбыҙҙың ҡәҙерен беләбеҙме һуң?

**(Башы 1-се биттә).**

***Салауат ВӘЛИӘХМӘТОВ, фермер:*** Ерҙә тыуып-үҫһәм дә, һөнәрем ер эше менән бәйле түгел ине тәүҙә. Уҡытыусы булып башланым хеҙмәт юлын, унан хакимиәттә эшләп алырға тура килде. Тыуҙырған һәм туйындырған еремә ана шундай урауырыҡ юлдар үтеп килергә, дөрөҫөрәге, асылыма ҡайтырға тура килде. Хәҙер мин үҙемде ауыҙ тултырып "ер кешеһе" тип әйтә алам. Йәштәштәрем төрлөһө төрлө тарафтарға таралып бөтһә лә, мин ауылыма ҡайтып, үҙемде ер эшендә һынап ҡарарға булдым, сөнки колхоз баҫыуҙарында ер һөрөп, иген үҫтереп ғүмере үткән атайым янында ҡыр эштәренә бәләкәйҙән өйрәнеп үҫкәс, уның бер ҡыйынлығы ла юҡ икәнен аңлай инем. Шуныһы ҡыуаныслы: беҙҙең Күгәрсен районында ер ҡәҙерен белгән кешеләр йәшәй. Башҡа яҡтарҙа, ерҙәр буш ята, тигән зарланыуҙарҙы йыш ишетеп, аптырауға ҡалам. Беҙҙә, киреһенсә, бушаған ер булмаҫмы, тип көтөп кенә тора халыҡ. Бәләкәй хужалыҡтар ҙа, фермерҙар ҙа үҙ майҙандарын киңәйтергә, эштәрен артабан йәйелдереп ебәрергә тырыша, сөнки өҫтәмә ер - ул өҫтәмә уңыш һәм табыш. Ер табыш килтерергә тейеш һәм уның хәстәрлекле хужаһы булырға тейеш. Күп нәмә был йәһәттән район хужаларына бәйле. Беҙҙең хакимиәт башлығы үҙе ауыл хужалығы өлкәһендә белгес булараҡ, ер ҡәҙерен белгән, талапсан, ғәҙел, эшлекле етәксе, шуға ла беҙҙә эш кешеһенә һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙыла, ерҙәребеҙ ҙә тулы ҡеүәтенә файҙаланыла. Ҡайһы бер тарафтарҙағы кеүек, пайсылар ҙа беҙҙә ерен ни эшләтергә белмәй аптыранып йөрөмәй, үҙҙәре эшкәртә йә ҡуртымға биреп, файҙаһын күрә. Мәҫәлән, Мәксүттәге "Октябрьский" йәмғиәте эшен генә миҫалға килтереп киткем килә. Был хужалыҡ йыл һайын пайсыларына 550 кг ашлыҡ тарата, ер өсөн һалым кеүек түләүҙәрҙе лә үҙҙәре күтәрә. Был, минеңсә, бик лайыҡлы өлгө. Киләсәктә лә шулай дауам итһен ине, тип теләге килә йәмғиәт егеттәренә. Ер ҡәҙерен мин ана шунда күрәм.

Хужаһыҙ ер - тимәк, ташландыҡ ер, ә уны былай мәсхәрәләү егетлек түгел. Үкенескә, һуңғы йылдарҙа йәштәрҙең ергә бик ылығып бармауы күҙәтелә, быныһы борсоуға һала: ер киләсәктә кемдәр ҡулына ҡалыр? Ә бына һыу, тигәндән, халыҡ беҙҙә эсәр һыуға мохтажлыҡ кисергәне юҡ, шөкөр. Беҙҙең Мәксүттә, мәҫәлән, һәр бер өйгә артезиан һыуы һыу үткәргестәр аша ғына килеп етә. Шишмәләребеҙ ҙә бар, уларҙы таҙартып, ҡарап торабыҙ, көртәләп алғанбыҙ. Һыу ҡәҙере лә бит ер ҡәҙере ише, бәлки, унан мөһимерәктер ҙә. Эйектең йылдан-йыл һайыға барыуы эсте бошора. Ерҙең үҙенә лә, кешелеккә лә иң тәүҙә фәҡәт һыу кәрәклеген иҫтән сығарып ебәрмәһәк ине, тип өндәшкем килә замандаштарға.

***Фәрзәнә МӨХӘМӘТЙӘНОВА, география уҡытыусыһы:*** Бөтөн донъя кимәлендә бер үк көндәрҙә тип әйтерлек  Ер көнө менән Һыу көндәре (20 һәм 22 март) билдәләнеүе юҡҡа түгел, әлбиттә. Ер менән һыу бер-береһенән башҡа йәшәй алмай, улар бер-береһен тулыландырып килә. Ғалимдар фаразлауынса, Ер бынан 4,5 миллиард йыл элек хасил булған. Уның диаметры 40 мең километрҙан ашыу, Ерҙең үҙәгенә барып етеү өсөн 6 мең километр оҙонлоҡта скважина бырауларға тура килер ине, ләкин был мөмкин түгел, сөнки Ер планетаны тотошлай уратып алған 70 километр ҡалынлыҡтағы ҡаты тоҡомдар менән ҡапланған, унан ары - шыйыҡ ҡатламдар. Ер ҡуйынында 4 меңдән ашыу төр минералдар тупланған, кешелек шуларҙың ни бары ике йөҙләбенә генә ҡулланылыш таба алған. Еребеҙҙе кеше факторы ҡатнашлығында килтерелеүе ихтимал һәләкәттәрҙән, бысраныуҙан һаҡлау - глобаль мәсьәлә булһа ла, айырым һәр бер кеше лә уның именлеге хаҡына күпте эшләй ала. Һәр изге нәмәгә мөнәсәбәт кеүек үк, ергә ҡарата ла кешелекле ҡараш ғаиләлә, мәктәптә һалына. Мәҫәлән, баҡсаға, мәктәп ишек алдарына ағастар, сәскәләр ултыртыу, булғандарын һаҡлау, экологик өмәләр бала күңелендә миһырбанлыҡ уятасаҡ, тип уйлайым. Һәм быларҙы Ер көнө йә дөйөм өмәләр көнө генә түгел, даими башҡарырға кәрәк. Ә дөрөҫөрәге, таҙартыуға ҡарағанда, бысратмаҫҡа, тәләфләмәҫкә өйрәтеүе яҡшыраҡ. Шул уҡ һыуҙы, мәҫәлән.

Рәсәй - һыу державаһы, тип кәпеҙенергә ярата, юғиһә, бәғзе берәүҙәр. Дөрөҫ, йылға үҙәндәре күләме буйынса беҙҙең ил донъяла  Бразилиянан ҡала - икенсе, йән башына һыу менән тәьминәт буйынса өсөнсө урында тора. Рәсәйҙә барлығы 2,5 миллион йылға һәм 2,7 миллион күл иҫәпләнә. Байкал күле генә лә дөйөм донъя күләмендәге эсәр һыу запасының 20 процентын тәшкил итә. Ләкин тирә-яҡ мөхиткә бөгөнгөләй битарафлыҡ хөкөм һөргәндә, был байлығыбыҙ ҙа төпһөҙ түгел. Йәшәгән төбәктәребеҙҙән генә сығып ҡараһаҡ та, был бик асыҡ күренеп тора: күпме йылғалар, шишмәкүлдәр ҡороп, юҡҡа сыға! Ҙур йылғаларҙың бәләкәй генә инештәрҙән юл алыуын онотмайыҡ шуға ла: шишмәләребеҙҙе һаҡлайыҡ, уларға тонсоғорға бирмәйек, юл асайыҡ, инеш баштарын көртәләп алайыҡ. Шунһыҙ йылғаларыбыҙҙың да ҡороп бөтөүе ихтимал. Ғалимдар былай ҙа саң ҡаға: 2025 йылға 3 миллиардлап кеше һыуға зар-интизар буласаҡ. Һыуҙың етештереү ҡалдыҡтары менән йә башҡа төр бысратылыу факттары асыҡланған осраҡта быға ҡул һелтәп ҡуймаҫҡа, тейешле органдарға еткерә барырға - был да һәр кемебеҙҙең ҡулынан килә торған эш. Яҙғы осорҙарҙа һәм, ғөмүмән, көнкүрештә һыу таҙартҡыстар менән файҙаланыу яҡшыраҡ, тип уйлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Апрелдән хаҡтар үҙгәрәсәк, шуға ла 31 мартҡа тиклем "Киске Өфө" гәзитенә 2016 йылдың икенсе яртыһы өсөн арзан хаҡҡа - 545 һум 76 тингә (индекс - 50665) яҙылып ҡалығыҙ. Почтала абонемент йәшниге булғандар өсөн яҙылыу хаҡы - 517 һум 26 тин. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары гәзитебеҙгә 488 һум 22 тингә, почтала абонемент йәшниге булғандар 465 һум 42 тингә яҙыла ала.**




• Мартта ла 2016 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән 3 уҡыусыбыҙға **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә аңлатма"** тигән китап бүләк итмәксебеҙ. Йә, кем алыҡ?

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республиканың муниципаль район, ҡала округтары һәм ҡала биләмәләре хакимиәттәре башлыҡтарының "Яңы шарттарҙа муниципаль идара итеүҙең һөҙөмтәлелеген арттырыу" семинарында сығыш яһаны. Ҡайһы бер район башлыҡтарын алмаштырыу муниципалитеттар үҫешенә ыңғай йоғонто яһаны, тип билдәләне республика Башлығы.

✓ 2016 йылда Башҡортостан халыҡҡа юғары технологиялы медицина ярҙамы күрһәтеүгә федераль ҡаҙнанан 174 миллион 558,6 мең һум субсидия аласаҡ. Тейешле бойороҡ Рәсәй Хөкүмәте сайтында баҫылған.

✓ Баймаҡ һәм Йылайыр райондарында - юғары әҙерлек, Хәйбуллала ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелгән. Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының баш идаралығында ведомство-ара оператив штаб булдырылған. Ведомствонан хәбәр итеүҙәренсә, эвакуацияланған халыҡты тәү сиратта тәьмин итеүҙе ойоштороу өсөн алты ваҡытлыса урынлаштырыу пункты әҙерләнгән. Унда 91 кеше урынлаштырылған, шуларҙың икәүһе - балалар. 19 стационар йылыныу пункты эшләй. Хәйбулла районында ун кешегә иҫәпләнгән мобиль йылыныу пункты булдырылған, ҡайнар аш бирелә.

✓ Башҡортостан Хөкүмәте "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм уға ярҙам күрһәтеү" дәүләт программаһын финанслау күләмен арттырҙы. Программаны тормошҡа ашырыуға сығымдар 4,47 миллиард һумға тиклем, йәғни 60 проценттан ашыуға арттырылған. 2013 йылда бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа ярҙам күрһәтеү буйынса программа ҡабул ителгән саҡта федераль ҡаҙнанан 1,97 миллиард һум аҡса бүлеү ҡаралғайны. Хәҙер ошо сумма 3,36 миллиард һумға етте.

✓ Башҡортостанда яңы эш башлаған фермерҙарға ярҙам күрһәтеү һәм крәҫтиән (фермер) хужалыҡтары нигеҙендә ғаилә малсылыҡ фермаларын үҫтереү буйынса маҡсатлы программала ҡатнашыусыларҙы һайлап алыу башланды. Ике программа ла 2018 йылға тиклем иҫәпләнгән. Быйыл ошо маҡсатлы программала ҡатнашыу өсөн 484 ғариза тупланған. Шуларҙың 399-ы яңы эш башлаған фермерҙарҙан килгән. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, маҡсатлы программаларҙа ҡатнашыусыларҙы һайлап алыу 8 апрелдә тамамлана.

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# БИТАРАФЛЫҠТАН ДАУА БАР МИКӘН?

**Яңыраҡ ил Президенты Владимир Путин РФ һаулыҡ һаҡлау министры Вероника Скворцованы ҡабул итте. Осрашыуҙа министр Рәсәйҙә һаулыҡ һаҡлау һәм демография өлкәһендә 2015 йылғы ҡайһы бер мәғлүмәттәр хаҡында хәбәр итте. Атап әйткәндә, ул рәсәйҙәрҙең уртаса ғүмер оҙайлығына ҡағылышлы ине. Был күрһәткес бөгөн 71,2 йәш тәшкил итә.**



В. Скворцова былтырғы йылда ғүмер оҙайлығының айырыуса ирҙәргә ҡағылыуын, уларҙың былтыр ярты йылға оҙағыраҡ йәшәүен һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Аҙыраҡ эсә башлағандармы?" тип ҡыҙыҡһынды ил башлығы. "Эйе, бер ни тиклем кимәлдә", тигән "томанлыраҡ" яуап булды. Министрҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, хеҙмәткә яраҡлы кешеләр араһында үлем осраҡтары һиҙелерлек кәмегән - уртаса 4,5 процент. Һандарға күсергәндә, был 21 меңдән ашыу кеше, шул иҫәптән уларҙың күпселеге 35-тән 60 йәшкә тиклемге ирҙәр икән. "Был үлем осраҡтарын кәметеүҙә ғәйәт ҙур потенциал, һәм беҙ был өлкәлә эшләйбеҙ", тип өҫтәне В. Скворцова. Тик бына "был өлкәлә" ниҙәр эшләнеүе хаҡында аныҡ мәғлүмәттәр генә ишетеп булманы. Күрәһең, ил башлығы ла тап ошо хаҡта ишетергә теләгәндер, ул сәләмәт тормош рәүешенә булышлыҡ итеүсе "тәмәке тартыу һәм эскелек күренештәренең кәмеүе, эш шарттары, юл-хәрәкәт хәүефһеҙлеге, ваҡытында медицина ярҙамы күрһәтеү һәм сирҙәрҙе иҫкәртеү" кеүек факторҙарҙы үҙе үк теҙеп һанап китте.

Артабан ил Президенты ауыл халҡына медицина ярҙамы ойоштороу буйынса эштәрҙең торошо менән ҡыҙыҡһынды. Министр йылына 500-гә яҡын фельдшер-акушер пункттары төҙөлөү хаҡында хәбәр итте һәм кешегә, ул ҡайҙа йәшәүенә ҡарамаҫтан, 20 минут эсендә ашығыс ярҙам күрһәтелергә тейешлегенә айырым иғтибар бирелеүе хаҡында ла ышаныслы итеп өҫтәп ҡуйҙы. Президент ышандымы быға, юҡмылыр, ә бына минең өсөн был көлкө, төптә буш һүҙ булып яңғыраны, сөнки төпкөл ауылда түгел, үҙебеҙҙең Өфө кеүек ҙур ҡалаларҙа ла бының мөмкин булмаған хәл икәнлегенә күптән инанғанбыҙ. Күптәребеҙ үҙ миҫалында.

Яңыраҡ ҡына бер ниндәй тәжрибәһеҙ гипертоник - үҙем менән булған хәлде алайыҡ, мәҫәлән. Ҡинәт кенә шулай ҡан баҫымы күтәрелде: 200/90-ды күрһәтә ине тонометр. Ғәҙәттәге 100/60-ҡа күнеккәнлектән, ышанмайынса, ҡат-ҡат үлсәйем, дарыуҙар эсеп тә ҡарайым. Ярты сәғәтләп ваҡыт үтте - бер үҙгәреш тә юҡ. Шунан "Ашығыс ярҙам" саҡыртырға тура килде һәм беҙ күҙ алдына килтерә алаһыҡмы, ул нисә сәғәттән һуң килде? 2,5 сәғәт ярым үткәс! Был ваҡыт эсендә кеше үлеп терелергә лә өлгөрөр ине. Миңә иһә был ваҡыт эсендә яңынан "Ашығыс ярҙам"ға шылтыратып, телефон аша ғына дауаланырға тура килде. "Ярҙам" килгәндә, шөкөр, мин шап-шактай инем инде. Әлбиттә, гипертоник кризды табиптар, бәлки, сиргә лә иҫәпләмәй торғандыр, ләкин уның ниндәй эҙемтәгә килтереү ихтималлығын уйлаһаң, бында тап әлеге "Ашығыс ярҙам" ғына ҡотҡара аласағы бәхәсһеҙ.

Бынының ярай, ә бына оло йәштәгеләргә беҙҙең медицинаның мөнәсәбәтен нисек аңларға? Уларға ашығыс ярҙам күрһәтеү түгел, стационарға дауаланырға ла һалмайҙар бит! Һалғанда ла, йә аҡса түләп, йә табиптарға мул ғына күстәнәс биреп, йә танышлыҡ аша ғына мөмкин был хәл. Яңыраҡ бер яҡын танышым Баймаҡ районының төпкөл ауылында йәшәгән 81 йәшлек әсәһенә 30 саҡрымдағы участка терапевынан да, район больницаһынан да ярҙам саҡыра алмауын рәнйеп һөйләп торғайны. Хәйер, киң матбуғат сараларында, телетапшырыуҙарҙа сабый балаларҙың, йәштәрҙең дә хатта, ваҡытында медицина ярҙамы күрһәтелмәгәнлектән, фажиғәле хәлдәргә тарыуы, ярҙам урынына йәҙрәҡтарын эшкә ҡушыусы "боксер" табиптар хаҡында материалдар йыш донъя күрә. Хәтерләһәгеҙ, әле яңыраҡ ҡына Белгород ҡала дауаханаһында хирург И. Зелендиновтың ҡеүәтле йоҙроғонан йығылып, башы бәрелеүҙән теге донъяға киткән 56 йәшлек ир һәм уның шул уҡ табиптан туҡмалған туғаны хаҡындағы тарих бөтөн илде тетрәткәйне.

Йоҙроҡ һирәк осраһа ла, тупаҫлыҡ, ауырыуға ҡарата битарафлыҡ менән көн дә осрашырға тура килә шул беҙгә. Кеше яратмаған, кеше менән эшләй торған һөнәрҙе нињә һайлай икән һуң ҡайһы бер врачтар? Ваҡытында ышанғы килмәһә лә, арҙаҡлы бер табип, профессорҙың, хәҙер медицина юғары уҡыу йорттарына осраҡлы кешеләр күп килә, дипломды һатып алыусылар ҙа бар, тигән һүҙҙәре иҫкә төшә. Гиппократ анты тигән нәмә күптән онотолдо. Һаулыҡ һаҡлау министрлыҡтары отчет-ҡағыҙҙар тултырыуҙан, һандар менән эш итеүҙән бер аҙ арынып, медицина өлкәһендә әхлаҡи климатты һәм ойоштороу эштәрен айырым контролгә алһын ине. Буласаҡ йәш табиптарҙы эшкә алырҙан алда уларҙың белем кимәлен, кешелек сифаттарын тағы бер тапҡыр һынау алдына ҡуйыу йә махсус берәй комиссия аша үткәреү кәрәктер?

Аптырағандан килеп сыҡҡан һорауҙар инде былары ла. Ойоштороу, тигәндән, теге йәки был табипка алдан яҙылыу системаһы ла үҙен аҡламаны. Участка терапевына, мәҫәлән, ике аҙна элек яҙылып та, сәғәте-минутына барып етһәң дә барыбер һыу буйы сират көтөп, ундағы тәртипһеҙлектәргә янып-көйөп ултырырға тура килә...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БАШ ЙОРТТА*



# ӨФӨБӨҘҘӘ...
## боронғолоҡ та һаҡланһын

**Өфөнөң үҙәген, көньяғын маҡтап күп һөйләйҙәр, гәзит-журналдарға яҙалар. Былтыр ШОС һәм БРИКС саммиттары ваҡытында әллә самолеттан, әллә вертолеттан киноға төшөрөп, телевизорҙан күрһәттеләр баш ҡаланы. Ысынлап та, бик нык төҙөкләндергәндәр. Бөтөн урамдарҙы шымартып йылтыраткандар. Балҡып тора, танырлыҡ түгел. Бала саҡ йылдарым үткән ул урамдарҙы барып күргем килә лә бит, тик ауырыу сәбәпле, бындай мөмкинлегем юҡ. Тик хәтирәләр менән йыуанырға ғына ҡалды...**

Бына күңелем төпкөлөнән 1945 йылда Өфөнә тәү тапҡыр күреүем тураһындағы хәтирәне килтереп сығарҙым. Пушкин урамында урынлашҡан ике ҡатлы ағас өй, 1-се һанлы балалар йорто. Беҙҙең йорт бүлмәбеҙ икенсе ҡатта урынлашҡайны. Көндөҙгө тәрбиәсе ҡайтып киткән, ә төнгө тәрбиәсе әле килмәгән мәл. Беҙ, балалар, тәҙрәләргә ябырылып, күл аша ғына урынлашҡан Аксаков баҡсаһын күҙәтәбеҙ. Унда ағас беседкала тынлы оркестр вальс көйө уйнай. Теҙелеп киткән лампочкаларҙан нурҙар сәселә. Беседка үҙе күлдә сағылып алып, тулҡындар ыңғайына бәүелә. Вальс көйөнә ағай-апайҙар әйләнеп бейей. Һоҡланыуҙан минең күңелемдә лә хистәр ҡайнаша. Бына оркестр тынып ҡала, беседканың уттары һүнә. Беҙгә лә йоҡларға ятырға ваҡыт. Урындарыбыҙға яткас та әле бүлмәбеҙҙәме, коридорҙамы эленгән радиоалғыстан ағылған йырҙарҙы тыңлайбыҙ, шым ғына ҡушылып йырлайбыҙ. Уларҙы һәр кис тигәндәй тыңлағас, рус телендә булһалар ҙа, ул йырҙарҙы отоп алып бөткәнбеҙ.

*"Ах, путь-дорожка, фронтовая,*
*Не страшна нам бомбежка любая.*
*А помирать нам рановато*
*Есть у нас еще дома дела... "*

Был йыр беҙгә, биш-биш ярым ғына йәштәге балаларға, бик тә ҡайғылы тойола. Һуғыш яландарындағы ир-егеттәрҙең һағышы сағылғанын бала күңеле менән аңлаған булғанбыҙҙыр инде, күрәһең.

Берҙән-бер көндө, таң атып, иртәнге сәйҙе эскәс, беҙҙе, бер ҡыҙ һәм бер малай менән ҡулға-ҡул тотоноштороп, рәткә теҙеп, Аксаков баҡсаһын ҡарарға алып барҙы тәрбиәсебеҙ. Унда бейек, ҡарт имән ағастары күләгәһендә грек мифтары батырҙарының аҡ һындары баҫып тора (үҫкәс белдем). Был һындар баҡсалағы һәм илдәге тынлыҡ һәм тыныслыҡ һағында торалар, тип уйланым ул саҡта бала күңеле менән.

Бик күп йылдар үтһә лә, ошо төнгө баҡса, көндөҙгө баҡса күңелдә һаҡлана. Өфөнөң үҙәгенә яңы һәйкәлдәр, фонтандар төҙәлдә, яңы, заманса йорттар ҡалҡып сыҡты. Ләкин минең быуындаштар Аксаков баҡсаһы булған, боронғолоҡто һаҡлаған бала саҡ ҡалаһын онотмай йәшәй шулай. Шуға ла Өфөбөҙҙөң бер генә мөйөшөндә булһа ла ул боронғолоҡ тороп ҡалырға тейештер ул...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Мартта республикала ҡарабойҙай ярмаһы (3,8 процентҡа), вермишель (2,4), алма (1,5), көнбағыш майы (1,4), бойҙай оно (1,2), аш тоҙо (1,0) ҡиммәтләнгән, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Аҡ май - 0,9 процентҡа, бөртөклө ҡара сәй - 0,8, арыш икмәге - 0,5, пастеризацияланған һөт - 0,4, бойҙай ононан бешерелгән икмәк һәм булка изделиелары - 0,3, стерилләнгән һөт һәм сусҡа ите - 0,2, һарыҡ ите һәм һыуытылған тауыҡ ите 0,1 процентҡа ҡыйбатланған. Шул уҡ ваҡытта картуф (2,2 процентҡа), кишер (1,9 процентҡа), аҡ кәсәнле кәбеҫтә (1,4), туңдырылған балыҡ һәм һыйыр ите (0,5), тауыҡ йомортҡаһы, тары һәм дөгө (0,4), шәкәр ҡомо һәм башлы һуған (0,1) арзанайған.

✔Быйыл йәй "Өфө" аэропортында Салоникиға тура рейс асыла. Һәр ун көн һайын (шишәмбе һәм йәкшәмбе) "Өфө - Салоники - Өфө" тура маршруттары ойоштороласы. Осоштар 2 июндән 25 сентябргә тиклем планлаштырылған. Грецияға 150 пассажирға иҫәпләнгән Airbus A319 самолеттары оса. Улар өсөн уңайлы расписание төҙөлгән: Салоникиға иртән барып етһәң, Өфөгә осоу иһә кискә планлаштырылған. Салоникиға тура рейс Халкидики ярымутрауына, Пиерия төбәгенә, Тасос утрауына турҙар өсөн башланғыс булып тора.

✔Россельхознадзор Рәсәйгә, шул иҫәптән өсөнсө илдәр аша, Төркиәнән боростар һәм гранаттар индереүҙе ваҡытлыса сикләү тураһында ҡарар ҡабул итте. Сәбәбе - Рәсәйгә тыйылған үҫемлекселек продукцияһын килтереү. Бороска һәм гранаттарға ваҡытлыса сикләү 17 марттан ғәмәлгә инде. Башҡортостан буйынса Россельхознадзор идаралығында аңлатыуҙарынса, ошо датаға тиклем тейәлгән борос һәм гранатты лабораторияла тикшергәндән һуң ғына Рәсәй биләмәһенә индерергә мөмкин.

✔Башҡортостандың баш ҡалаһында теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1,26 процент тәшкил итә. Әлеге ваҡытта Өфөләге мәшғүллек хеҙмәтендә һигеҙ меңдән ашыу кеше иҫәптә тора. Шуларҙың ете меңдән ашыуы - эшһеҙ. Ҡаланың вакансиялар банкында 7,5 мең самаһы буш эш урыны тураһында мәғлүмәт бар. Хәҙер баш ҡалала тулы булмаған эш аҙнаһы шарттарында эшләгән 12 предприятие иҫәпләнә.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭЛЕКТРОН МӘҒАРИФ ҮҪӘ

**Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһы Башлығы ҡарамағындағы Советтың дүртенсе күсмә ултырышын уҙғарҙы. Ул электрон мәғарифты үҫтереү мәсьәләләренә арналды.**

Республикала 2020 йылға тиклем Электрон мәғариф үҫеше концепцияһы раҫлана. Ошо осорға тейешле "юл картаһы" ҡабул ителгән. "Электрон" ҡушымтаһы менән йыл һайын дөйөм белем биреү ойошмаларының рейтингы уҙғарыла. Төрлө белем биреү кимәлендә мониторинг системаһы индерелә. Белем биреү ойошмаларының сайттарын берләштереүсе портал эшләнгән. Мәғариф ойошмалары ассоциацияһы эшләй. 2016 йылдан ошо маҡсатта дөйөм суммаһы 30 миллион һум тәшкил иткән республика Башлығы гранттары булдырылды. Быйылдан башлап алдынғылар ресурстар алаҫаҡ. Республика Башлығы билдәләүенсә, асыҡ, бушлай платформаға йүнәлтелгән һөҙөмтәле мәғариф контентын булдырыу өҫтөндә әүҙем эшләргә, республиканың алдынғы вуздары, китапханаларының китаптарын һәм материалдарын онлайн уҡыу мөмкинлеге тәьмин ителәргә тейеш.

Өфөнөң мәғариф учреждениеларында электрон белем биреүҙең үҫеше менән ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, барлыҡ мәктәптәр ҙә интернетҡа тоташтырылған. Мәғариф учреждениеларының 67 процентында 437 сымһыҙ интернет бар. Тикшереүҙәр асыҡлауынса, Өфө мәктәптәренең 44 процентында электрон белем биреү системаһын индереү Мәскәү мәктәптәре кимәленә тиң.

# ТӘБИҒӘТ АПТЫРАТА ЛА...

**Яҙ етә башлаһа, йылға эргәһендә урынлашҡан ауыл-ҡалаларҙы бер проблема борсоуға һала: ташҡын ваҡытында һыу баҫыуҙар булырмы, юҡмы? Был мәсьәлә баш ҡала райондарын да урап үтмәй, сөнки Өфө Ағиҙел, Ҡариҙел һәм Дим йылғалары үҙәнендә урынлашҡан.**

Әлеге ваҡытта йылғалар бассейнындағы ҡар нормала тип билдәләнһә лә, көҙгө ямғырҙар һөҙөмтәһендә ерҙәге дымлылыҡ 27 процентҡа артығыраҡ. Өҫтәүенә, тәбиғәттең уй-пландарын белеп булмай, кеше бер төрлө күҙаллаһа, ул икенсе төрлө итеп тормошҡа ашырып ҡуйыусан. Уҙған йылдар тәжрибәһе күрһәтеүенсә, ҡала территорияһында һыу 5 метрға күтәрелгәндә һыу баҫыу күҙәтелеп, автомобиль юлдарынан аша китә, 7 метр булғанда Нижегородка биҫтәһендә йорт янындағы участкалар һыу аҫтында ҡала. 7,5 метр булғанда инде Кооператив ялан, Өсөнсө пристань, Нижегородка, Затон биҫтәләрендәге торлаҡ йорттар һыу баҫыу зонаһына эләгә. Һыу 8 метрға күтәрелгәндә һыу баҫыу зонаһы ла арта. 9 метрҙа инде 13,6 меңдән ашыу кеше йәшәгән 3,6 мең торлаҡ йортто һыу баҫыуы ихтимал.

Яҙғы ташҡынды бөлә-ҡазаһыҙ ғына үткәреү маҡсатында ҡалала 10 марттан уҡ ташҡынға ҡаршы комиссиялар эш башланы. Барлығы 19 штаб, 12 күҙәтеү посы һәм 6 мең кешене ваҡытлыса урынлаштырырлыҡ 51 пункт ойошторолған. Уларҙа халыҡ именлеген булдырыу өсөн махсус белгестәр йәлеп ителәсәк. Идара итеү органдары һәм ҡала көстәренең берлектәге эшмәкәрлеген яйлау маҡсатынан 8 күнекмәнең 5-һе уҙғарылған да инде. Ташҡын ваҡытында эшмәкәрлеге туктатылып торасаҡ трансформатор подстанцияларының, һауа һәм кабель линияларының исемлеге аныҡланып, раҫланған. Ағиҙел - 694, Ҡариҙел - 800, Дим йылғаһы 700 сантиметрға күтәрелгән ваҡытта авария хәл-торошон барлыҡҡа килтермәү өсөн ҡулланыусыларҙы электр менән тәьмин итеү туктатыласаҡ. Һыу ҡапыл күтәрелгән осраҡта халыҡҡа мәғлүмәт еткереү ысулдары асыҡланған, улар хәүефһеҙлек саралары буйынса күнекмә үткән.

# ТАҒЫ БЕР МӘҒАРИФ ФОРУМЫ

**Өфөлә Конгресс-холда "Киләсәк мәғарифы" форумы асылды. Унда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡатнашты.**

Форум барышында республика етәксеһе М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының уҡытыусының һөнәри үҫеше өсөн шарттар тыуҙырыу буйынса мөмкинлектәре менән таныштты. Уҡыу йорто ректоры Раил Әсәҙуллин "Асыҡ мәктәп" проектын тәҡдим итте. Был - берҙәм республика теҙмәһенә ярашлы төбәктәге мәктәптәрҙә мәктәп программаһының бөтә предметтары буйынса өҙләкһеҙ уҡыу һәм өҫтәмә онлайн-контент менән тәьмин итеүсе электрон белем биреү ресурсы. Порталда дәрестәрҙе Өфөнөң һәм республиканың алдынғы уҡытыусылары алып бара.

Рөстәм Хәмитов шулай уҡ БДПУ-ның алдынғы педагогик тәжрибәләрҙе таратыуға йүнәлтелгән "Башҡортостандың мәғлүмәт-мәғариф порталы" һәм "Башҡортостандың иң яҡшы уҡытыусылары һәм мәктәптәре" проекттары, республика белем биреү ойошмаларының күргәҙмәһе менән таныштты һәм "Йәш профессионалдар" чемпионатының төбәк этабында еңеүселәргә дипломдар тапшырҙы.

# ЮЛДАР, ЮЛДАР...

**Дөйөм Рәсәй халыҡ фронтының төбәк бүлексәһе ағзалары Өфө хакимиәтенең коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы, Юлдар һәм яһалма ҡоролмаларҙы төҙөү, ремонтлау идаралығы, киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре менән берлектә юлдар торошон тикшереү буйынса рейд ойошторолдо.**

Рейдта ҡатнашыусылар Совет, Октябрь, Орджоникидзе һәм Калинин райондары юлдары, атап әйткәндә, Бабушкин, Комсомол, Сипайлово, Трамвай, Сельская Богородская, Вологодская, Ҡулса, Невский урамдары буйлап үтте. Тикшереү мәлендә юлдарҙың күпселек өлөшөндә соҡорҙарҙы ямау эштәре бара ине. Маршруттың планы буйынса ҡаланың төрлө урындарында туҡталыштар яһалды, унда район хакимиәте башлыҡтары урынбаҫарҙары юлдарҙың торошо хаҡында мәғлүмәт бирҙе. Калинин районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Алик Вәлиев билдәләүенсә, бөгөн районда хәүефһеҙ йөрөү өсөн соҡорҙар ямала, төҙөлөш миҙгелендә капиталь ремонт башлана. Тәүҙә Беренсе Май урамы төҙөкләндерелә. Быйыл район һәм ҡала көсө менән Интернациональ урамында эштәр тамамланасаҡ. Орджоникидзе районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Игорь Трухневич фекеренсә, ҡыштың йылы булыуы, шулай уҡ капиталь ремонт үткәрелмәүе юлдарҙың торошона кире тәьҫир итте. "Беҙ ҡаланың төньяҡ һәм көньяҡ өлөшөндәге юлдар торошон ҡараныҡ. Күп йәһәттән эштәр башҡарыла. Берҙән-бер мәсьәлә - технологияларҙы теүәл үтәү, был иһә ҡала хакимиәте заказсыһы вәкиле намыҫында ҡала", - тип билдәләне Дөйөм Рәсәй халыҡ фронты Башҡортостан төбәк штабының эшсе төркөмө етәксеһе Николай Фадеев.

# ТӘЖРИБӘБЕҘ АЛДЫНҒЫ

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Федерация Советының федератив ҡоролош, төбәк сәйәсәте, урындағы үҙидаралыҡ, Төньяҡ һәм Рәсәй ҡалалары союзының берлектәге "Территорияларҙы үҫтереү мәсьәләләрен хәл итеүҙә Рәсәй ҡалалары тәжрибәһе" тип аталған ултырышында ҡатнашты.**

Сарала белдерелеүенсә, стратегик планлаштырылыу тураһындағы яңы закон ҡалаларҙы үҫтереүгә яңы импульс бирәсәк. Быны ошондай система менән эшләүсе Өфө, Хабаровск, Һамар, Пермь ҡалаларында инвестиция әүҙемлеге үҫеүе, социаль-иҡтисади үҫеш күрһәткесе күтәрелеүе лә раҫлай. Рәсәй ҡалалары союзының эш формаларының береһе - Иң яҡшы муниципаль тәжрибәләр форумы. Ул ҡала етәкселәренең, осрашып, ҡыҙыҡһындырған мәсьәләләр буйынса фекер алышыу, ғәмәли белемдәре һәм тәжрибәләре менән бүлешеү майҙансығы булып тора. Әле шундай өс форум үтһә, дүртенсеһен быйыл июндә Өфөлә үткәреү күҙаллана. IV Форум Конгресс-холда үтәсәк һәм халыҡ-ара статусҡа эйә буласаҡ: уға сил илдәрҙәге муниципалитеттарҙан вәкилдәр саҡырыласаҡ. Бынан тыш, ноябрҙә Башҡортостандың баш ҡалаһында Рәсәй ҡалалары союзының мәрхәмәтлелек буйынса форумын үткәреү ҙә планлаштырыла.

# ҺӨҘӨМТӘЛӘР БАРЛАНДЫ

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 28-се ултырышында республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең 2015 йылдағы эшмәкәрлеге буйынса отчет тәҡдим итте.**

Билдәләнеүенсә, былтыр республиканың тупланма бюджетына 144 миллиард һум аҡса инген, был 2014 йылғы күрһәткестәрҙән 8,2 процентҡа күберәк. Килем күләме буйынса республика илдә - 13-сө урындан 10-ға һәм Волга буйы федераль округында өсөнсөнән икенсе урынға күтәрелгән. Рөстәм Зәки улы сәнәғәт, төҙөлөш, агросәнәғәт комплексы өлкәһендәге былтырғы һөҙөмтәләрҙе билдәләне, инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу, бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа ярҙам саралары хаҡында һөйләне, социаль һәм йәштәр сәйәсәте, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, мәҙәниәт һәм спорт өлкәһендә эш һөҙөмтәләрен барланы. Республика халҡының ғүмер оҙайлығы 70 йәштән уҙыуы, һуңғы биш йылда төбәктә ҡан әйләнеше сирҙәренән вафат булыусылар һаны кәмеүе, уҙған йыл йомғаҡтары буйынса сабыйҙар үлеме 5 процентҡа кәмеүе хаҡында ла әйтеп үтте. Мәғариф өлкәһен яңыртыу хаҡында һөйләгәндә республика Башлығы Башҡортостанда өс йәштән ете йәшкәсә балалар өсөн балалар баҡсаһына сираттың бөтөрөләүен билдәләне. Былтыр мәктәпкәсә учреждениеларҙа өҫтәмә 8 800 самаһы урын булдырылған. Өс йәшкә тиклемге балалар өсөн мәктәпкәсә белем алыу мөмкинлеген арттырыу, мәктәптәрҙә икенсе сменаны бөтөрөү хәҙер төп бурыс булып тора.

Ултырыш һуңынан парламентарийҙар иғтибарына Башҡортостанда Кеше хоҡуҡтары буйынса вәкилдең уҙған йылда республикала кеше хоҡуҡтарын һәм азатлығын һаҡлау тураһында доклады тәҡдим ителде.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте фирма магазинының майҙанын киңәйтте. Саҭуҙа залын презентациялау мәлендә китап продукцияһына 10 процентлыҡ ташлама яһалды. Адресы: Октябрь проспекты, 2. Ошо көндәрҙә нәшриәттең яңы сайты ла эшләй башланы. Ресурс заманса, унайлы һәм бай мәғлүмәтле. Интернет-магазин аша китаптарҙың ҡағыҙ һәм электрон варианттарын һатып алырға мөмкин.

✔Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында Асыҡ ишектәр көнө уҙғарыла. 1, 8, 15 һәм 22 апрелдә иртәнге сәғәт 10-дан киске 5-кә тиклем республиканың төп иждади уҡыу йорто менән танышырға теләүселәрҙе саҡыралар. Һорауҙар менән ҡабул итеү комиссияһына мөрәжәғәт итергә мөмкин. Адресы: Ленин урамы, 14, телефон: 276-19-36. Музыка факультеты: 273-45-91, башҡорт музыкаһы факультеты: 272-40-26, ситтән тороп уҡыу бүлеге: тел.: 272-27-60; икенсе корпустың адресы: Цюрупа урамы, 9, театр факультеты: 272-24-31, һынлы сәнғәт факультеты: 276-47-29.

✔Яңы йорттарҙа торлаҡ алған граждандарҙың ипотека кредиты буйынса процент ставкаһын субсидиялау программаһы 2017 йылдың 1 ғинуарына тиклем оҙайтылды. Рәсәй Хөкүмәтенең тейешле ҡарарына ярашлы, 2016 йылдың 1 мартынан бирелгән кредит буйынса субсидия йылына 2,5 процент күләмендә билдәләнә. Субсидиялау программаһы буйынса ипотека кредиты йылына 12 проценттан артмаған ставканы, фатир хаҡының 20 проценты күләмендә тәүге иғәнәне һәм 25-30 йыл дауамында түләү ваҡытын күҙ уңында тота.

✔Күп фатирлы йорттарҙа капиталь ремонтлауға иғәнәнең минималь күләме артмаясаҡ, тип белдерҙе Өфөлә үткән брифингта Башҡортостан Төбәк операторының генераль директоры Борис Герасимов. Әлеге ваҡытта алты ҡатҡа тиклемге йорттарҙа иғәнәнең минималь күләме бер квадрат метр өсөн - 5,2, алты ҡаттан күберәк йорттарҙа 5,8 һумға тиң. 2016 йылда республикала кәм тигәндә дөйөм майҙаны 4,1 миллион квадрат метрлыҡ 1063 күп фатирлы йорттарҙы ремонтлау ҡаралған. Шуның менән бергә 170 мең самаһы кеше йәшәү шарттарын яҡшыртырға тейеш. Былтыр дөйөм майҙаны 4 миллион квадрат метрлыҡ 1012 йортҡа ремонт башҡарылған.

✔ ***Бөтә донъя фольклориадаһына тиклем Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан әҙерләнгән "Башҡорт халыҡ ижады" томдарын сығарып бөтөү хәстәрлеген күреүҙе һорарға.***



ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# БЫЛ УЛТЫРЫШ ТА...

## көнүҙәк бурыстарҙы барланы

**Үткән аҙнала Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Сибай ҡала хакимиәте менән берлектә "Башҡорттар: үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге" тигән Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһы үтте.**

Конференцияның пленар өлөшөндә Сибай институты директоры, профессор Зиннур Йәрмөхәмәтов, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе, биология фәндәре докторы Әмир Ишемғолов ҡатнашты һәм сығыш яһаны.

- Был сарала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары, шулай уҡ милләттәштәребеҙ күпләп йәшәгән Силәбе өлкәһе, Марий Эл республикаһы, Көньяҡ Урал райондары һәм ҡалалары башҡорттары ҡоролтайҙары вәкилдәре, төрлө уҡыу йорттары, ғилми-тикшеренеү институттары ғалимдары, махсус урта һәм дөйөм белем биреү учреждениелары уҡытыусылары ҡатнаша. Белеүегеҙсә, беҙҙең уҡыу йорто базаһында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты менән берлектә бындай форматтағы конференция тәүге таптҡыр ғына үтмәй, йәғни 2013, 2015 йылдарҙа ла халҡыбыҙҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге өсөн мөһим булған мәсьәләләргә арналған ғилми-ғәмәли конференциялар ойошторолғайны. Бөгөнгө йыйынға ла эш күрһәтеү өсөн генә йыйылманыҡ. Билдәле булыуынса, былтыр ноябрь айында баш ҡалабыҙ Өфөлә төрлө төбәктәрҙә, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙә йәшәгән милләтебеҙ вәкилдәре IV Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына йыйылғайны. Ул ярайһы ғына эшлекле шарттарҙа үтеп, республикабыҙҙы, хатта бөтә Рәсәйҙе борсоған проблемаларҙы күтәреп сыҡты. Ҡоролтай ҡабул иткән документтарҙа 2015 йылдың аҙағына тиклем Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының төрлө тәбәктәрҙәге ҡоролтайҙары ҡатнашлығында IV Ҡоролтай резолюцияһын тормошҡа ашырыу буйынса 2016-2020 йылдарға иҫәпләнгән аныҡ эш планы төҙөү тураһында айырым пункт бар ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул ваҡиғанан һуң 4 ай ваҡыт үтеп китһә лә, был эш һаман да урын еренә еткерелмәгән. Бөгөнгө сарала тап ошо IV Ҡоролтай ҡабул иткән резолюцияның тормошҡа ашырылыу юлдарын эҙләү, сараларҙы барлау, шулай уҡ алдағы биш йыллыҡҡа халҡыбыҙҙы милләт булараҡ һаҡлауға йүнәлдерелгән аныҡ эш планы ҡабул итеү күҙ уңында тотола ла инде, - тине Зиннур Ғәбәйҙулла улы үҙенең сығышында. Ул шулай уҡ үткән IV Ҡоролтайҙа телгә алынған "Мәғариф системаһын оптималләштереү туған телен өйрәнеүсе башҡорт балалары һанының кәмеүенә килтергән төп сәбәп булып тора. 2010 йылдан 2015 йылға тиклем башҡорт мәктәптәре һаны 123-кә (!) кәмене. Һөҙөмтәлә башҡорт балалары уҡыуҙарын урыҫ йәки татар телендә дауам итергә мәжбүр", тигән юлдарҙы ла миҫал итеп килтерҙе һәм был тәңгәлдә кисекмәҫтән хәл ителәһе мәсьәләләр барлығы хаҡында иҫкәртте.

Артабан ултырыштағы сығыштар ошо юҫыкта дауам итте лә инде: ниндәй генә өлкәлә ауырлыҡтар барлыҡҡа килмәһен, туған телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлау маҡсатында эшләргә, берләшергә тейешбеҙ. Ниндәйҙер закондарға, юғарынан төшкән күрһәтмәләргә, етәкселәр әйткәнгә генә ҡарап ултырыр замандар уҙған. Халыҡ үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алырға, үҙ-үҙен хәстәрләргә тейеш. Мәсәлән, туған телде һаҡлау һәм яҡлауҙың төп шарты - милләтебеҙ вәкилдәренең үҙ асылын аңлауына, уның милли үҙаңына бәйләнгән. Әгәр ҙә, мәктәптә өйрәтерҙәр әле, тип, балаларынды үҙ ғаиләндә үҙ туған телендә һөйләшергә, фекерләргә өйрәтмәйһең икән, һинең башҡортлоҡ асылыңды, тамырҙарыңды бер ниндәй законцар ҙа һаҡлап ҡала алмаясаҡ. Ултырышта яңғыраған бар сығыштарҙың йөкмәткеһенә лә ошондай фекерҙәр, милләт яҙмышы өсөн борсолоу һалынғайны.

Сығыштарҙан һуң ҡоролтайсылар эште секцияларға бүленеп дауам итте. Бында төрлө район һәм ҡалаларҙағы ҡоролтайҙар эшмәкәрлеге, бөгөнгө көндәге милли сәйәсәттең социаль-мәҙәни һәм тарихи-хоҡуҡи аспекттары һәм, әлбиттә, туған тел мәсьәләләре тикшерелде. Төрлө сығыштар тыңланып, анализдар яһалғандан һәм фекерҙәр төйнәлгәндән һуң, "Башҡорттар: үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге" Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференцияһы ун пунктлан торған резолюция ҡабул итте һәм шул резолюция менән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына мөрәжәғәт итте. Шуларҙың бер нисәһе:

- Бөтөн донъя башҡорттарының IV ҡоролтайы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу буйынса эш планы төҙөп, уны интернет һәм матбуғат баҫмалары аша халыҡҡа еткерергә, өҫтәмәләр, тәҡдимдәр индерергә;
- Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайына "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закон буйынса киң йәмәғәтселек ҡатнашлығында парламент тыңлауҙары үткәреүен һорап мөрәжәғәт итергә;
- Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенән 2020 йылда Башҡортостанда уҙғарыласаҡ Бөтә донъя фольклориадаһына тиклем Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тарафынан әҙерләнгән "Башҡорт халыҡ ижады" томдарын сығарып бөтөү хәстәрлеген күреүҙе һорарға;
- Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенән Өфөләге һәм башҡа ҡалаларҙағы юғары уҡыу йорттарынан ситтә ятыуын һәм башҡорт халҡы компактлы йәшәгән Урал арьяғы төбәгенең үҙәгендә урынлашыуын күҙ уңында тотоп, БДУ-ның Сибай институтына иғтибарҙы көсәйтеүҙе һорарға; Сибай институтында 45.03.01 "Филология" йүнәлешенең "Ватан филологияһы" профиле (Башҡорт теле һәм әҙәбиәте), 46.03.01 "Тарих" йүнәлеше буйынса бюджет нигеҙендә абитуриенттар ҡабул итеү мәсьәләһен юлларға;
- Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға, күрше Татарстан һәм Удмурт республикаһындағы һымаҡ, "Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәре тураһында"ғы Законға ике дәүләт телен ҡулланыу мотлаҡ булған граждандарҙың эш хаҡына 3 - 15 процент күләмендә өҫтәмә түләү мәсьәләһенән ҡараған үҙгәреш индереү тураһында тәҡдим итергә.

Шулай итеп, тәфсирләп әҙһән да, яҙмаһаң да, халҡыбыҙ вәкилдәре йыйылған ошондай һәр сарала мөһим хәбәрҙәр һөйләйбеҙ. Аҙаҡ иһә ҡабул ителгән ҡарарҙар күп ваҡыт ҡағыҙҙа ғына теркәлеп тороп ҡала. Бынан егерме йыл элек тә, ун йыл элек тә шулай булды. Шунан инде ул ҡарарҙарҙың ғәмәлгә ашмауынала кемдәрҙелер ғәйепләй, кемдәрҙелер енә-йәтсегә тинләй башлайбыҙ. Шундай инде фиғелебеҙ... Их, һәр беребеҙ "Хөкүмәт эшләргә тейеш!", "Ҡоролтай эшләргә тейеш!" тигән талаптарҙы телгә индермәй, төрлө сәбәптәргә һылтанмай ғына милләткә ҡағылған мәсьәләләрҙе хәл итеүгә үҙе тотонһа, һәр кем үҙ урынында низер эшләһә икән! Тик быныһы ла хыялда ғына, ҡыҙғанысҡа ҡаршы...

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ЙҮНӘЛЕШТӘР БИЛДӘЛӘНДЕ

**Ошо көндәрҙә Өфөлә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ултырышы уҙҙы. Унда Ҡаҙағстан, Ханты-Манси автономиялы округы, Пермь крайы, Татарстан Республикаһы, Свердловск, Силәбе һәм Ҡурған өлкәләре башҡорт ҡоролтайҙары вәкилдәре ҡатнашты.**

Ултырышта Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесенең урынбаҫарҙары, шулай уҡ комиссиялар рәйестәре раҫланды. Беренсе урынбаҫар итеп быға тиклем Башҡарма комитет аппаратына етәкселек иткән Вельмир Аҙнаев, йәмәғәт башланғысындағы урынбаҫар итеп билдәле ғалимә Фирҙәүес Хисамитдинова һайланды.

Урындағы үҙидара, ер мөнәсәбәттәре, хоҡуҡ, эшҡыуарлыҡ һәм туризм мәсьәләләре буйынса комиссияға - Ҡырмыҫҡалы районы хакимиәте башлығы Фәнзил Сыңғыҙов, республиканан һәм Рәсәйҙән ситтә йәшәгән башҡорттар менән эшләү буйынса комиссияға БДУ-ның философия һәм социология факультеты деканы Ғәфүр Сәлихов етәкселек итәсәк. Йәштәр сәйәсәте һәм спорт мәсьәләләре буйынса комиссия менән эшләү Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының Йәштәр советы рәйесе Рәмзил Байназаровҡа йөкмәтелде. Мәғариф һәм фән буйынса комиссия рәйесе итеп педагогика фәндәре кандидаты Вәкил Хажин, башҡорт телен һәм әҙәбиәтен үҫтереү буйынса комиссия етәксеһе итеп филология фәндәре кандидаты Фәнзил Санъяров һайланды. БДУ-ның тарих факультеты доценты, тарих фәндәре кандидаты Нурислам Ҡалмантаев башҡорт халҡының тарихы мәсьәләләре буйынса комиссия етәксеһе, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының художество етәксеһе, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Олег Ханов башҡорт халҡының мәҙәниәте һәм рухи мираҫы буйынса комиссия рәйесе итеп тәғәйенләнде. Демография, ғаилә, әсәлек, атайлыҡ һәм балалыҡ мәсьәләләре буйынса комиссия менән "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, дини ойошмаларҙың эшмәкәрлеген күҙәтеү комиссияһы менән Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе урынбаҫары Айнур Арыҫланов, мәғлүмәт сәйәсәте буйынса комиссия менән "Йәшлек" гәзитенең баш мөхәррире Артур Дәүләтбәков, Территориаль йәмәғәт үҙидаралары комиссияһы менән Буранбай Күсәбаев етәкселек итәсәк.

Башҡарма комитет ултырышында шулай уҡ яңы структуралар: башҡорт йәмәғәт ойошмалары, йәштәр ойошмалары менән эшләү буйынса координация советтары һәм башҡорт телендәге киң мәғлүмәт саралары советы ойошторолдо. Бынан тыш, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағында "Ҡоролтай" гәзите булдырылды, ул республика гәзиттәренә ҡушымта рәүешендә донъя күрәсәк.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Битлек

❖ Биттәге һырҙарҙан ҡотолоу өсөн өйҙә төрлө битлектәр эшләргә кәрәк. Мәсәлән, банан был йәһәттән бик файҙалы. 1 бананды изеп 1 ҡалаҡ бал, 2 ҡалаҡ һөт өҫтө ҡушығыҙ. Тирегеҙ майлы булһа, ярты балғалаҡ лимон һуты өҫтәп ебәрегеҙ. Бит тиреһенә һөртөп, 15-20 минуттан йыуығыҙ һәм аҡ сәскә төнәтмәһе йәки йәшел сәйҙә тундырып яһалған боҙ менән йөрөтөп сығығыҙ.

❖ Ярты бананды изеп, 1 йомортҡа һарыһы, 1 балғалаҡ зәйтүн майы ҡушып, биткә һөртөргә һәм 20 минуттан мамыҡ менән һөртөп алырға.

❖ 1 ҡалаҡ банан иҙмәһенә 1 балғалаҡ лимон һуты, 1 йомортҡа ағы ҡушырға, миксерҙа болғатырға, биткә 15 минутҡа һөртөргә. Бит тиреһен төҙә һыуыҡ һыу менән йыуып, аҙаҡтан аҡ сәскә төнәтмәһе менән сылатырған мамыҡ менән һөртөп алырға.

❖ Ярты банан, бер бүлем әфлисунды яҡшылап изергә. Бит һәм муйын тиреһенә һөртергә. Яҡынса 20 минуттан һуң йылы һыу менән йыуырға. Аҙнаһына бер тапҡыр ғына эшләргә. Битлектән һуң биткә алоэ һуты һөртһәң, тағы ла яҡшыраҡ.

### Йәшлекте оҙайтам, тиһәң...

❖ С витамины организмға ҡартайырға ирек бирмәй. Етмәһә, варенье ашарға яратһағыҙ, уны лимон менән кивинан ҡайнатып алығыҙ. 1 кг киви, 1 лимон, 1 лимон һуты, 900 грамм шәкәр. Лимонды щетка менән йыуып, нәҙек кенә итеп турарға. 100 грамм шәкәр һәм 100 мл һыу менән бергә кәстрүлгә һалырға, 10 минут бешерергә. Кивины таҙартып, түңәрәкләп ҡырҡып, кәстрүлгә өҫтәргә. Лимон һуты менән ҡалған шәкәрҙе ҡушырға. Ҡайнау хәленә еткерергә. Керамик һауытҡа ҡойорға ла, төнгөлөккә бүлмә температураһында ҡалдырырға. Икенсе көнөнә вареньены кире кәстрүлгә һалырға, 20 минут ҡайнатырға, болғап торорға. Стерилле банкаларға һалырға, һыуынғас, ҡараңғы, һалҡын урынға ҡуйырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# НАУРУЗ БАЙРАМЫ

**"Ҡышты оҙатыу" байрамында айырыуса иғтибар йәлеп иткән бер нәмә бар. Ул - кейендереп ҡуйылған Ҡыш бабай һыны. Уны күмәк халыҡ алдында үртәйҙәр.**

Быңдай саҡта: "Ҡыш башында һин ҡәҙерле ҡунаҡ инең, хәҙер инде яндырылаһың", - тип, уны ҡыҙғанып та ҡуяһың. Ләкин шул саҡ репродукторҙар аша йырҙар, төрлө көлкөлә таҡмаҡтар яңғырай башлай. Ҡышҡа ҡарап, яҙ, йәй миҙгелен һынау тураһындағы мәғлүмәттәр әйтелә, күләмәстәр һөйләнә. Унан инде уйындар, бәйгеләр башлана. Боҙ өҫтөндә шыршы ла була, уға төрлө-төрлө бүләктәр эленә. Кемдең буйы етә - бүләк шуныҡы.

Науруз байрамының да сере бар: уҙған йылдағы иң иҫтәлекле ваҡиғаларға бағышлап шәкерттәр кескенә бәйеттәр яҙғандар. Уларҙы өйҙән-өйгә уҡып йөрөгәндәр. Бәйет әйтеү - аят әйтеү һауабы, тигән халыҡ. Быңдай бәйеттәр ауыл йәки ҡаланың йылъяҙмаһына кергән. Науруз бәйетенең бер өлгөһө:

*Һауанан осар мең ҡаҙ,*
*Меңенең башлығы - бер ҡаҙ.*
*Асылыр мөхәррәм* яҙ -*
*Науруз мөбәрәгә бар.*
*Науруз әйтә беҙ килдек,*
*Ҡотло ямалын күрҙек,*
*Изге доғалар ҡылдыҡ -*
*Науруз мөбәрәгә бар.*
*Ағиҙел буйы гел тирәк,*
*Япраҡтары һирәк-һирәк,*
*Тамаҡ ҡатҡан, май кәрәк -*
*Науруз мөбәрәгә бар.*
*Науруз хаҡы - бер алтын,*
*Ҡарама ялтан-йолтан,*
*Ҡараһаң, бир ике алтын.*
*Науруз мөбәрәгә бар.*
*Эй, төш, бикәм, төш, бикәм,*
*Төшөп башмаҡ кей, бикәм,*
*Науруз хаҡын бир, бикәм -*
*Науруз мөбәрәгә бар.*
*Һауала себен тызлар,*
*Был өйҙә күптер ҡыҙҙар,*
*Уларҙы күреп эс һыҙлар -*
*Науруз мөбәрәгә бар.*
*Былбыл, һандуғас һайрар,*
*Тутыйғош шәкәр сәйнәр,*
*Кәкүк, ҡарға әҙе ҡайнар -*
*Науруз мөбәрәгә бар.*
*Эй, Зәйнулла, Зәйнулла, -*
*Һары май ашар мулла,*
*Килтерһәгеҙ ни була!*
*Науруз мөбәрәгә бар...*

Науруз көндәре уйын-йолалары менән дә иҫтәлекле. Байрамда иң сибәр, аҡыллы ҡыҙҙы Наурузбикә итеп һайлап, унан йәйҙең нисек булаһын һорағандар. Ҡыҙ, әлбиттә, яҡшы йәй генә юраған. Уның һүҙҙәре ҡарттар күңеленә лә хуш килгән. "Юрауың юш булһын, Наурузбикә!" тип хуплағандар.

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

*мөхәррәм - һижри йылының 622 йылы, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең Мәккәнән Мәҙингә күскән йылы, мосолманса йыл иҫәбе башы (беренсе айы).*

АФАРИН!

# ӘСЕ ЛӘ, ТАҢҺЫҠ ТА...

## "Шаяниум"сыларҙың юмор күстәнәсе

(Башы 1-се биттә).

"Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсының район этабында бөтәһе 44 команда ҡатнашҡан, шуларҙың 22-һе ҡала кимәленә сыҡҡан. Финал уйынында түбәндәге иң шәп ете команда көс һынашты: 48-се башҡорт лицейының "Сәтәкәй", 122-се башҡорт гимназияһының "Ша-шу-ша", 120-се башҡорт гимназияһының "Етегән+1", Ф. Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһының "ХХ централ", М. Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының "Кендектәр", Республика башҡорт лицей-интернатының "Башҡорттар.RU" һәм 159-сы мәктәптең "Хыялый-зыялыйҙар" командалары. Быйыл квнсылар алдына "Әйткән һүҙ - атҡан уҡ" мәҡәленең айышына тешөндөргән күләмәстәр әҙерләү бурысы ҡуйылғайны. Конкурстың тәүге "Фристайл" өлөшөндә "Хыялый-зыялыйҙар" бик тапҡыр күләмәстәр менән алдырҙы. Был команданың составында төрлө милләт вәкилдәре уйнай. Әйтергә кәрәк, улар башҡа командаларҙан һис тә ҡалышмай, телдәре телгә йөкмәй, башҡортса мәҙәктәр һөйләп, залды геү килтереп көлдөрөп алды. Рәсәйҙә һәм республикала Рәсәй киноһы йылы үткәрелеүгә арналған уйында кино сәнғәте тураһында шаяртыу мотлаҡ ине. Ошо юҫыҡтағы күләмәстәр араһында "Хыялый-зыялыйҙар"-ҙың "Дарт Вейдер ауылда" миниатюраһы иң оригиналь һәм иҫтә ҡалырлыҡ булды. Күҙ алдына килтерегеҙ, донъяға билдәле "Звездные войны" фильмының төп геройы ауыл халҡына көндәлек эштәрендә ярҙам итеп йөрөй. Малға бесән ташлау, һыйыр һауыу Дарт өсөн бер ни тормай, ул барыһын да "һә" тигәнсе башҡарып ҡуя. Шулай ҙа: "Дарт улым, һарыҡтың йөнөн ҡырҡ әле", - тигән үтенескә герой ҡылысын тартып сығарғас, зал шикләнеп ҡуйҙы. Һөҙөмтәлә, һарыҡтан шешлек бешерергә ҡарар ителде. Быныһ менән уҡыусылар нимә әйтергә теләгәндер, әммә тамашасылар аныҡ аңланы: ялҡауланып үҙ тапҡырыңдағы эште төрлө сит ил геройҙарына япһарып ултырыу яҡшылыҡҡа килтермәй. Бөтә эштәрҙе лә үҙебеҙ башҡарайыҡ, инвесторҙар һәм ярҙам көтөп ултырмайыҡ, тигән кинәйә һалынған төҫлө килеп сыҡты.

Ғөмүмән, беҙҙең уҡыусылар ололар күҙенә салынмаған төрлө етешһеҙлектәрҙе лә элеп алып, көлкөгә әйләндерә һалып ҡуйырға оҫта булып сыҡты. "Етегән+1" командаһы ауылдарҙа үткән Ҡөрьән аштарында ололарҙың үҙҙәрен нисек тотоуҙан бик урынлы көлдө. Әлбиттә, шаян балалар себендән фил яһарға ла күп һорап тормай. Шулай ҙа, йәш быуындың тәрбиәһеҙлеге, тәртипһеҙлеге тураһында һүҙ йөрөтөр алдынан, үҙ ҡылыҡтарыбыҙға ситтән күҙ һалыу ҡамасау итмәҫ. Балалар бит һәр ваҡыт нимә күрә, шуны ҡабатлай.


"Кендектәр" командаһы.


"Ша-шу-ша" командаһы.


"ХХ централ" командаһы.

"Кендектәр" командаһының көлкө мүксаһындағы күләмәстәр баш ҡалала үткән ШОС һәм БРИКС саммиттарына, Баймаҡ менән Әбйәлил райондары халыҡтарының менталитетына арналды. Бик оҙаҡ көлә торғас, хәҙер былар өйҙәренә тукмалмай ғына ҡайтып етә алырмы, тип ҡайғыра башланы тамашасылар. "Кендектәр"ҙе тик уйын аҙағында: "Әбйәлилдәрҙән һәм баймаҡтарҙан көлмәйбеҙ, ә Урал арьяғын үҫтереү программаһы өсөн тырышабыҙ", - тигән һүҙҙәре генә ҡотҡарып ҡалды, ахыры.

Быйылғы "Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсының иң мауыҡтырғыс "Видеояҙмаһы йәнләндереү" тип аталған өлөшөндә командалар совет киноларындағы, билдәле сит ил фильмдарындағы геройҙар булып "һөйләште". Был идеяның уңышлы килеп сығырына шик тыуып ҡуйғайны ҡуйыуын. Әммә юҡҡа хафаланғанбыҙ, уҡыусылар һәр мәлдә алтын урталыҡ һаҡланы, йәнле диалогтар аша ҡыҙыҡлы сюжеттар тыуҙырҙы. Видеояҙмалар фәһемле лә булып сыҡты. Мәҫәлән, "Ша-шу-ша" командаһы мотлаҡ башҡортса гәзит-журналдар уҡырға кәңәш итһә, "Башҡорттар.RU" квнсыларының сығышынан һуң тамашасылар ҡымыҙ һәм айран-ул башҡорт халҡының милли эсемлеге булыуын аңына һалып ҡуйҙы.

Конкурстың һуңғы этабы "Музыкаль номер" тип аталды. Ул йәш квнсыларҙың йыр-моңға маһирлығын, актерлыҡ һәләттәрен һынап ҡарау ниәтендә үткәрелә. "Етегән+1" командаһы йәш йырсы Ринат Ниғмәтуллиндың популяр йырын үҙгәртеп, "Һыйырҙы нисек һауырға бер кем дә өйрәтмәй, Ҡайҙан еленен табырға, бер кем дә күрһәтмәй", - тип яңғыратты. Был ҡала балаларын ауыл тормошо менән таныштырыу ниәтендә бөгөн бер ниндәй ҙә программалар ҡаралмауына, саралар үткәрелмәүенә ишара булды. Ярай әле беҙҙең балалар йәйге каникулда ауылға олатайөләсәйҙәренә ҡайтып йөрөй. Шундай оҙайлы ял көндәре нисек үтеүе тураһында "ХХ централ" командаһы бәйән итте. Ғөмүмән, мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу мәсьәләләре лә, уҡытыусыларҙың ауыр хеҙмәте, оптималлаштереү күренештәре, республикалағы социаль-иҡтисади һәм сәйәси мәсьәләләр ҙә квнсыларҙың юмор объектына әйләнде.

"Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар конкурсын тамаша ҡылыусы ололар - Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов, хакимиәттең Йәштәр сәйәсәте комитеты рәйесе Илнур Әминов, мәғариф идаралығы хеҙмәткәрҙәре һәм финалға сыҡҡан ете белем усағы директорҙары бик ҡәнәғәт ҡалды: баш ҡала мәктәптәрендә туған башҡорт телендә белем алыусы балалар ҙа, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡыусы башҡа милләт балалары ла "Шаяниум" конкурсы талаптарын үтәп, етди, фәһемле уйын ойоштороуға өлгәште. Улар был конкурс мәлендә үҙҙәрен сәхнәлә тоторға өйрәнде, яңы дуҫтар, фекерҙәштәр тапты, туған телдең матур яңғырашына өлгәште, күңелдәренә сәм ҡундырҙы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Шаяниум" шаяндар һәм тапҡырҙар бәйгеһендә III урынға - "ХХ централ", II урынға - "Ша-шу-ша", I урынға - "Кендектәр" командалары лайыҡ булды. Гран-при был уйын миҙгеленең иң шәп квнсылары - "Башҡорттар.RU" командаһы егеттәренә тапшырылды. "Иң шәп ир-егет ролен башҡарыусы" һәм "Иң шәп ҡатын-ҡыҙ ролен башҡарыусы" номинацияларында "Етегән+1" командаһынан Айнур Шәрипов һәм "Сәтәкәй"ҙән Әлиә Мөхәмәтйәнова билдәләнде.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*✓ Уғыр халыҡтарының Башҡортостан ерендә булғандарының башҡортлашыуы Ирәкте ырыуы шәжәрәһендә, күп риүәйәттәрҙә лә һүрәтләнә. XV быуат аҙағында Өфө хандары нуғай мырҙаларына буйһонған.*

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Билдәле булыуынса, 1243 йылға Башҡортостан монголдарға буйһондоролоп, Алтын Урҙа дәүләте составына ингән. Хиуа ханы Әбүлғази (1603 -1664) яҙыуынса, Джучи үлгәндән һуң, Батый үҙенең кесе туғаны Шыбанға ерҙәр бүлеп биргән. Нуғайҙың балаларына эләккән ерҙәр Ак Урҙа тип атала башлаған. Ә инде Тоҡта ханға (1290 - 1312) Ыбыр-Сыбыр, Рус, Либка, Укек, Маджар, Болғар, Башгирд, Һарай, Берке тигән улыстар буйһонған. Был улыс Күк Урҙа тигән исем алған.**

# ӨФӨ ХАНДАРЫ - КЕМДӘР УЛАР?



Әммә ваҡытында В.В. Бартольд, аҙаҡ Т.И. Солтанов Әбүлғазиҙың яҙғандарының дөрөҫ түгел икәнен асыҡлай. Ғалимдарҙың күбеһе, "Аҡ Урҙа" тигән термин Джучи улусының уң ҡулын аңлата, тигән фекерҙә. Әммә нисек кенә булмаһын, Башҡортостан шул уң ҡулға ингән булырға тейеш. Урал аръяғындағы ерҙәр Шыбан улысына ҡараған.

Хиуа ханы Әбүлғазиҙың артабанғы һүҙҙәренә лә иғтибар итергә кәрәк: Шыбан нәҫеленән булған бер туған солтандар Ибраһим менән Ғәрәпшаһ, атайҙарының ерҙәрен "икесе бүлешеп, бер жирдә күчеп вә нунып, Жаек суының башында жәйләп вә Сыр суының аягында ҡышлап, татулык илән гомер кичерделәр..." Шулай итеп, Яйыҡ йылғаһының башы (Башҡортостан территорияһы) 1360-1370 йылдарҙа Шыбан нәҫеленән булған солтандарҙың улысы һаналған.

Шыбаниҙар XIV быуаттың аҙағында, Батый хандың нәҫеле бөткәс, көсәйә башлаған. Шул уҡ Ғәрәпшаһ, билдәле булыуынса, 1377 йылда Алтын Урҙа ханы булып китә һәм Түбәнге Новгород ҡалаһын баҫып ала. Һарайҙы 1380 йылда Туҡтамыш баҫып алғанға тиклем ул хан булып ултыра. 1360 йылдарҙа атаһы Булаттимер ҙә һарайҙа аҙ ғына ваҡыт ханлыҡ вазифаһын башҡара. Был факттар Шыбаниҙарҙың көслө ҡәүемгә әйләнеүе һәм көнбайышҡа табан экспанцияһы хаҡында һөйләй. Бындай сәйәси үҙгәрештәр Башҡортостан территорияһын да урап үтмәгәндер. Алтын Урҙала 1360-1370 йылдарҙа "Бөйөк сыуалыштар" осоронда төньяҡ Башҡортостанда ниндәйҙер Шыбаниҙар нығынған булһа кәрәк. 1428 йылда Шыбаниҙарҙың береһе Әбелхайыр (1412 - 1468) күсмә үзбәктәр дәүләтен - Үзбәк ханлығын төҙөй. Уның ейәне Мөхәммәт Шәйбани (1451-1510) XVI быуат башында Мәүәрәүиннахрҙы баҫып ала, Аҡһаҡ Тимер нәҫеленән булған хакимдарҙы Урта Азиянан Афғанстан менән Һиндостанға ҡыҫырыҡлап сығара. Икенсе Шыбани Хажи-Мөхәммәт, Көнбайыш Себерҙә ҡалып, Себер ханлығына нигеҙ һала.

Шыбаниҙар Башҡортостанда ла идара иткән булырға тейеш. 1883 йылда сыҡҡан "Справочная книжка Уфимской губернии" тигән китапта бер риүәйәт килтерелә: "... Турахан, һөйләүҙәре буйынса, Сынғыҙ нәҫеленән, һәм Себер ханы Күсем ҡулы аҫтында булған, әммә аҙаҡ Күсем менән аралары боҙолоп, үҙенең 8 меңлек урҙаһы менән Өфө ҡалаһы янына күсенгән, бында 4 ай тирәһе Торатау тигән тау эргәһендә торған. Үлән етмәү сәбәпле, хан Ыҫлаҡ йылғаһынан көнбайышҡараҡ күсенергә мәжбүр була. Унда ҡалырға уйлап, үҙенә йорт менән мәсет төҙөтә. Турахан бында ҡорал менән килә һәм башҡорттарҙы үҙенә буйһондора, үҙе Ҡаҙан ханының власын таный. Рустар Ҡаҙанды алғас, хан хәҙерге Стәрлетамаҡ ҡалаһы тирәһенә күсенә"'. Шулай итеп, ниндәйҙер Турахан Сыңғыҙхан нәҫеленән һәм Себер улысынан сыҡҡан кеше булып сыға. Себерҙә, белеүебеҙсә, Шыбаниҙар һәм Тайбуғалар идара иткән. Риүәйәттә Турахан Себерҙә 1563-1598 йылдарҙа хан булған, Шыбани Күсем ваҡытында йәшәгән, тип күрһәтелә.

Бер мәҡәләмдә, Турахан Иҙеүкәй әмир (XV быуат башы), уның тыуасары Алсағыр мырҙа (1510 йылдар), Ҡаҙанды яулап алыу осоронда (1552 йыл) ла йәшәгән, тип күрһәттем. Шуға ла Турахан исем түгел, ә ике һүҙҙән торған ("түрә" һәм "хан") титул тип фараз иткәйнем. Әле иһә Турахандың Себер улысынан сығыуына баҫым яһап үтке килә. Себер - Шыбаниҙарҙың төп йорто, улыстары. Өфө ҡәлғәһендә идара иткән Турахан да Шыбан нәҫеленән булғанға оҡшай. Боронғо төрки телендә "тура" һүҙе "ҡәлғә", "кала" тигәнде аңлатҡан. Шундай уҡ мәғәнәлә был һүҙ Себер ханлығында бик йыш ҡулланылған. Мәҫәлән, ханлыҡтың баш ҡалаһы Чимга-Тура тип аталған. Тайбуға кенәздәренең резиденцияһы Ҡыҙыл-Тура ҡәлғәһендә булған. Шулай уҡ исемдәрендә "тура" һүҙе булған башҡа ҡаласыҡтар ҙа күп була Себерҙә. XVI быуатта Себер ханлығын "Тура" тип кенә йөрөткәндәр. Мәҫәлән, XVI быуаттың икенсе яртыһында ижад иткән төрөк тарихсыһы Сәйфи Чәләби әҫәрендә лә "Себер", "Себер ханлығы" һүҙҙәре ҡулланылмай, ә ул дәүләт "Тура" тип атала. Бөтә "Турахан" исемле Башҡортостанда идара иткән хандар Өфө ҡәлғәһендә ултырғандар. Бәлки, был исем "ҡала (Өфө) хакимы" тигәнде аңлаталыр? Өфөнөң боронғо исемендә лә Себерҙәге һымаҡ "тура" ("ҡала") һүҙе булманымы икән?

Тағы ла Шыбаниҙарҙың шәжәрәһенә лә күҙ һалырға кәрәк. Мәҫәлән, фарсы тарихсыһы Рашид-əд-Дин яҙыуынса, Шыбандың бер ейәне "Тури" (башҡортса "Түрә") исемле булған. Әммә әмир Тимурҙың улы Шахрухтың бойороғо буйынса яҙылған "Монгол солтандарының шәжәрәләрен данлаған китап"та был исем "Бури", йәғни "Бүре" ("Волк") тип бирелгән, һуңғыһы дөрөҫөрәктер, тип уйларға кәрәк. Риүәйәттәрҙә Турахандың Өфөнән Ыҫлаҡ йылғаһы буйына күсенеүе икенсе улысҡа кереү һымаҡ һүрәтләнә. Ә бит хан ҡаланан 50-70 саҡрымға ғына йырағыраҡ киткән. Был хәл көньяҡ Башҡортостандың тәүге ваҡытта Өфө хакимдарына буйһонмағанлығы тураһында һөйләй булһа кәрәк. Турахандың ҡул аҫтында тик төньяҡ Башҡортостан ғына булған. Уға буйһонған халыҡ та башҡорт ырыуҙары түгел, ахыры. Юҡҡа ғына төньяҡ Башҡортостандағы ҡалаларҙы аҙаҡ рус крәҫтиәндәре "шайтан" ҡаласыҡтары тип йөрөтмәгән бит. Башҡорттар ҙа, рустар ҙа уларҙа, әлбиттә, йәшәмәгән.

Әйтергә кәрәк, хәҙерге Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында ошо ваҡыттарҙа ғүмер иткән чиялик археологик культураһына ҡараған халыҡты ғалимдар уғырҙар менән бәйләй. Мәҫәлән, йәш ғалим И.В. Антонов яҙыуынса, был уғырҙар аҙаҡ төркиләшкән. Улар башҡорттарҙың бүләр, байлар ырыуҙарының ата- бабалары булырға тейеш, тип фараз ителә. Уғыр халыҡтарының Башҡортостан ерендә булғандарының башҡортлашыуы Ирәкте ырыуы шәжәрәһендә, күп риүәйәттәрҙә лә һүрәтләнә. XV быуат аҙағында Өфө хандары нуғай мырҙаларына буйһонған. Был ваҡытҡа инде төньяҡ Башҡортостандағы халыҡ башҡортлашып өлгөргән була. Нуғайҙар Өфө хандарын вассал итеп власта ҡалдырған һәм уларға көньяҡ Башҡортостанды (мәҫәлән, меңдәрҙе) ла үҙҙәре исеменән идара итергә бойора.

**Шамил ИҪӘНҒОЛОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Иван ЛЕПЕХИН*

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

Икенсе көндә беҙ Сапсал йылғасығы исеме менән Сапсал тип аталған Һаҡмар ямынан (XVIII быуатта почта станцияһы атамаһы. - **Ред. иҫк.**) 4 саҡрымда булған, үҙенең киңлеге менән түгел (уның урамаһы 4 саҡрымдан да артмай), ә таш киҫеүсе Брагинды үлтереү менән билдәле Талҡаҫ күленә килеп еттек. Был күл үҙенең ҙурлығына ҡарамаҫтан, төрлө ваҡ балыҡтарға бай. Был күлдән өҫтәрәк алыҫтан күренеп торған, Ирәндек тип аталған айырым тау һырттары урынлашҡан. Ул Яйыҡ йылғаһына ҡойған Таналыҡ һәм Төйәләҫ йылғалары үрҙәре араһында ята.

Ошо күлдән 48 саҡрым алыҫлыҡта, Һаҡмар йылғаһы үрендә, Исәт юлы буйында Әүәнәш йылғаһы исеменән алынған Әүәнәш ямына 12 саҡрым етмәҫтән, Ҡоръятмаҫ тигән данлы агат тауы бар, беҙ уға табан барғанда 25 саҡрымдан боролоп, Туралы йылғаһы аша сыҡтыҡ, был йылға буйында ла ошолай уҡ исемләнгән ям бар. Был йылғасыҡтан 12 саҡрым алыҫлыҡта Ҡараса йылға (Черная речка) аға; унан ары Бөрсөнсө һәм Ағаулы тигән ике күл бар, икеһе лә балыҡлы. Ҡоръятмаҫ тауы бейек кенә, әммә һөҙәк, һәм ул араларынан Исәт юлы үткән ике һыртҡа бүленгән.

Таулыҡай старшинаны ҡалдырғас, Уралдан ағып сығып, Ҡана йылғаһына ҡойоусы Күркәтау йылғасығы буйында ошо мәлдә беҙҙән 25 саҡрымда урынлашҡан Төркмән старшина йәйләүенә киттек. Ошо 25 саҡрым беҙгә 100 саҡрымдай тойолдо; сөнки беҙ ылау менән текә тауҙар һәм Яйыҡ йылғаһына ҡойоусы Йылайыр йылғаһының һаҙлыҡлы башы аша үтергә тейеш булдыҡ; ошо көндө беҙҙең бөтә тырышлығыбыҙ Йылайыр йылғасығы башында элек иҫкә алынғандарынан бер ние менән дә айырылып тормаған ҡарағусҡыл алтын билдәләре булған ике урын менән бүләкләнде.

Ауыр юл беҙҙе ныҡ ялҡытты, һәм беҙ, юлыбыҙҙы еңеләштерергә теләп, старшинанан айырым оҙатып йөрөүсе талап иттек, һәм ул үҙенең Уралдағы яңылыҡтарын һөйләп, үҙенә яҡын арала йәйләүҙә күсеп йөрөүсе, Уралда бар ерҙәрҙе лә яҡшы белеүсе булып танылған Илеш старшинаны тәҡдим итте.

Старшина Илеш ул саҡта Төркмәндән 4 саҡрымда ғына күсеп йөрөй ине, һәм мин уны йәйләүгә үҙем барып күреүҙе яҡшыраҡ тип табып, шуның менән башҡорттарҙың ғорурлығын ҡәнәғәтләндерергә теләнем: сөнки башҡорттар үҙҙәренең йәйләүендә, бигерәк тә старшиналар, һәр саҡта ла һауалы була. Ваҡытты әрәм итмәйенсә, уның олоҫона киттек, унда тик олоғайған кешеләрҙе генә тап иттек; ә старшина мәрхүмде иҫкә алыу мәжлесендә ине. Старшинаны мәжлес ваҡытында борсоу йүнле ғәмәл түгел, һәм был мөмкин дә түгел ине: шулай итеп, көслө ямғырға ҡарамаҫтан, беҙ ошо бәләле олоҫҡа табан сабып сығып киттек.

**(Дауамы бар).**

***Ойошма төҙөүҙең маҡсаты - халыҡты берләштереү. Советтар Союзы тарҡалғандан һуң беҙ берҙәмлекте юғалттыҡ. Һәм уларҙы бергә туплау, үҙенең ауылына файҙа килтерерлек эш эшләү өсөн ниндәйҙер идея зарурлығы тыуҙы.***

# ТЕРРИТОРИАЛЬ ЙӘМӘҒӘТ

## халыҡты үҙен һаҡлап

**Быйыл Рәсәйҙә беренсе тапҡыр "Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары (ТЙҮ) лигаһы" Коммерция булмаған ойошмалар (КБО) ассоциацияһының съезы үтте. Уның эшендә Мәләүез районының "Йомаҡ" Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы рәйесе Шаһиҙә ИШҠОЛОВА менән Ишембай районының "Бүжә" Территориаль йәмәғәт үҙидаралығы рәйесе Азамат ИСХАҠОВ ҡатнашты. Улар менән әңгәмәне тап съезд хәтирәләренән башларға булдыҡ.**

**Беренсе ҡоймаҡ төйөрлө була, тиһәләр ҙә, Рәсәй тарихында Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарының тәүге тапҡыр уҙған оло йыйынын нисек баһалайығыҙ, унан үҙегеҙгә ниндәй һабаҡтар алдығыҙ?**

**Ш. Ишҡолова:** Съезд уҙғарыуҙың төп маҡсаты - ТЙҮ механизмын өйрәнеү һәм камиллаштырыу буйынса берҙәм майҙансыҡ булдырыу, заман талаптарын иҫәпкә алып, уларҙың эшмәкәрлеген әүҙемләштереү. Шуға ла сараның эше халыҡтың ТЙҮ тураһындағы мәғлүмәт кимәлен күтәреүгә, уларҙың инициативаосорҙа ғына тора, тигән һығымта яһаным. Башҡа ҡалаларҙы, төбәктәрҙә ҡараһаң, уларҙа Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарына ярҙам итеү, үҫтереү программалары, хатта төбәк кимәлендә ҡануниәт нормалары эшләнгән. Беҙгә уларҙың тәжрибәһен өйрәнергә, үҙебеҙгә ҡабул итергә кәрәк. Сөнки беҙ ТЙҮ саҡ барлыҡҡа килә, тип уйлаһаҡ, бәктиһән, хатта совет заманында уҡ ойошторолғандары ла бар икән

Һәр яңы башланғыс, башта бер төркөмдөң инициативаһынан сығып, ярҙам күрһәтелмәһә, йәйләп һүнеп ҡала, ҡыҙыҡһыныу әләне беҙҙә лә нисектер хәл итеү юлдарын эҙләргә кәрәк. Был бер йылда ғына тормошҡа ашырыла торған эш түгел.

**Ш. Ишҡолова:** 18 йыл эшләгән бер ТЙҮ рәйесе үҙенең сығышында: "Иҫәпләүҙәребеҙ күрһәтеүенсә, Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарына һалынған 1 һум бюджет аҡсаһы 6 һумлыҡ файҙаға әйләнә", - тине. Ғөмүмән, съезда ысынбарлыҡтың фән менән раҫланыуы күренде, унда, Парето законы буйынса, 20 процент эшләгәндә, 80 процент пассив күҙәтеүсе була, шул уҡ ваҡытта улар ҙа уңыштарҙан файҙалана, тинеләр. Беҙҙең халыҡта ла аңламай ине, тиергә лә була. Беҙгә лә уның төп идеяһын аңлап, йөрәгебеҙ, күңелебеҙ аша үткәреү, ҡабул итеү өсөн бер йыл кәрәк булды.

Съезда асыҡланыуынса, барлыҡ Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары ла бер үк ауырлыҡтар кисерә, әлеге ваҡытта уларҙы коммерция ойошмаларына индерергәме, әллә йәмәғәт ойошмаларына индерергәме, тип баш ваталар. Мәҫәлән, "Бүжә" Территориаль йәмәғәт үҙидаралығын да ауыл советында ғына теркәнек, юридик ойошма түгелбеҙ. Сөнки бының тотош Рәсәй буйынса үҙенең ауырлыҡтары, үҙенсәлектәре бар. Әгәр ойошманы Юстиция министрлығында теркәтһәң, ул айырым юридик ойошма булып һанала һәм отчет биреү талап ителә. Йәғни, бухгалтер, юридик мәсьәләләр килеп тыуғанда юрист хеҙмәте булырға тейеш. Ҡыҫҡаһы, ойошманы финанс йәһәтенән тәьмин итергә

күп тапҡырҙар билдәләнде, минең дә фекерем шундай: ТЙҮ - халыҡтың власть, бизнес менән, шулай уҡ үҙ-ара диалогы ул. Һәм әле ошо диалог яңы кимәлгә сыҡты, тип әйтергә була. Икенсе яҡтан, был ойошма халыҡтың үҙбаһаһын үҫтереүҙә лә мөһим роль уйнай. Мәҫәлән, йәйгеһен йыйын үткәрҙек, ауылдаштар шул тиклем дәртләнешеп, ҡорбан салып, милли аштар әҙерләп, ихлас ҡатнашты. Ҡаҙ өмәһе ваҡыты еткәйне, тағы дәртләнешеп киттеләр. Элек ҡар яуһа, ауылдан сыға алмай ултырған саҡтар ҙа бар ине, был мәсьәләне тиҙ арала хәл итәбеҙ. Ойошманың үҙенең ДТ тракторы бар. Әлеге көндә ошондай ойошоу, бергә булыу бик яҡшы. Юҡҡа ғына, күмәкләгән - яу ҡайтарған, тимәйҙәр бит.

**Тәүҙә халыҡ идеяны күтәреп алып, һуңынан уларҙың ошо күтәренкелеге кәмей, күптәр ситтән күҙәтеүсегә генә әйләнә. Был нимәнән килеп сыға: кешелә власҡа ғына түгел, хатта үҙенә, яңы башланғыстың эшләп алып китеренә, үҫеренә, ошо ойошмала үҙе лә ҡатнашып йөрөй алырына ышанысы юғалыуҙанмы? Был үҙе үк власть менән халыҡ араһында айырымлаҙы барлыҡҡа килеүҙең бер сәбәбе түгелме?**

**А. Исхаҡов:** Ауыл советы үҙ территорияһындағы таҙалыҡ, төҙөкләндереү, иментек өсөн яуаплы булһа ла, ул ауыл халҡына, ана, барып ҡарағураны сабып сыҡ, тип әйтә алмай. Кеше шул ауылда йәшәһә лә, ул һеҙҙең эшегеҙ, миңә уның өсөн түләмәйҙәр бит, тип әйтәсәк. Ауыл советына нимәләр эшләү өсөн аҡса табырға кәрәк. Ә халыҡ үҙе йыйылып, ошо эште эшләй йәки балалар майҙансығы төҙөй икән, быны улар үҙҙәре лә башҡара ала, ә ауыл советы матди йәки башҡа яҡтан ярҙам итә. Быңдай симбиоз ҡыҙыҡлыраҡ та. Шуға күрә, ойошма төҙөүҙең маҡсаты - халыҡты берләштереү, бергә туплау ине. Советтар Союзы тарҡалғандан һуң беҙ берҙәмлекте юғалттыҡ, халыҡ үҙ алдына йәшәне. Һәм уларҙы бергә туплау, үҙенең ауылына файҙа килтерерлек эш эшләү өсөн ниндәйҙер идея зарурлығы тыуҙы. Артабанғы ваҡиғалар инде мотлаҡ булған эштәр араһында экология, төҙөкләндереү, мәҙәни мәсьәләләр менән бәйле булды. Мәҫәлән, мәҙәниәт усағы бар икән, ул үҙе генә бөтөн проблемаларҙы хәл итә алмай. Ауыл советтарында ауылдар һаны ни тиклем күберәк, уларҙың барыһына ла тейешле иғтибар етмәүе лә ихтимал. Шуға күрә кешеләр йыйылып, нимәләр эшләй икән, быны күтәреп алырға, хупларға кәрәк. Йәғни ТЙҮ урындарҙа ауыл советтарына, район хакимиәттәренә яҡшы ярҙамсы булып тора.

ларын тормошҡа ашырыу өсөн шарттар тыуҙырыуға, тәжрибә уртаҡлашыуға йүнәлтелгәйне. Беҙҙең өсөн файҙалы мәлдәр күп булды, сөнки, үҙебеҙҙән генә сығып әйткәндә лә, тәжрибәбеҙ бик аҙ. РФ Юстиция министрлығында теркәлеү үтеп, 15-20 йыл эшләгән ТЙҮ етәкселәре лә, проблемалар һәр саҡ буласаҡ, тип белдерә. Йәғни, тормош бер урында ғына тормай, бөгөн был мәсьәләне хәл итһәң, иртәгә икенсеһе тыуа, ихтыяждар арта, һәр беребеҙ яҡшыраҡҡа ынтыла. Был ғәҙәти күренеш.

Съезда РФ Дәүләт Думаһы, Федерация Советы ағзалары, эшҡыуарҙар, фән, социаль йүнәлешле Коммерция булмаған ойошмалар вәкилдәре, илдең 70 төбәгенән ТЙҮ активистары ҡатнашты. Был хәрәкәт күп төбәктәрҙә әүҙем алып барыла. Бығаи Волгоград, Силәбе, Пермь, Омск, Новосибирск, Якут-Саха, Ульяновск, Түбәнге Новгород, Ленинград һәм башҡа республика-өлкәләрҙән килгән вәкилдәрҙең сығышын тыңлап инандыҡ. Рәсәйгә яңы ғына ҡушылған Севастополь ҡалаһынан да вәкилдәр булды. Улар ил ҡануниәтенә яраҡлашырға, бөтөн һыңғай күренештәрҙе үҙҙәренә алырға тырыша. Ҡаҙағстандан килгән делегация иһә бөтөн залды үҙенә ҡаратып ҡуйҙы. Сит дәүләт булһалар ҙа, һаман да аҙымдарын "оло ағай"ға ҡарап баҫалар икән. Яҡутстан делегацияһына ҡарап, һоҡланып ултырҙыҡ. Барыһы ла үҙҙәренең стилләштерелгән теген милли кейемдәрендә йөрөнө. Делегация етәксеһе Спиридон Борбуев сығыш яһарға сыҡҡас, съезда ҡатнашыусыларҙы иң элек туған яҡут телендә сәләмләне. Баштараҡ сәйерһенеп ҡабул иткәйнәләр, һуңынан сарала ҡатнашыусылар ихтирамдарын көслө һәм оҙаҡ тынмай дауам иткән алҡыштар аша белдерҙе. Быны һүҙ менән генә әйтеп аңлатырлыҡ түгел.

**А. Исхаҡов:** Мин үҙемә, Башҡортостанда был эш башланғыс

бөтә. Шуға күрә Башҡортостанда ла ТЙҮ-гә ярҙам итеү мөмкинлектәре табылһын ине. Әлеге ваҡытта республикала Коммерция булмаған ойошмаларға грант ярҙамы ғына бар. Әммә грант



алыу өсөн ойошманың теркәлеү үтеүе мотлаҡ. Беҙҙә бөгөнгә иҫәптә булған 600 ТЙҮ араһында Юстиция министрлығының Башҡортостан идаралығында теркәлеү үткәндәр ни бары 7 генә. Улар араһында грант юллау өсөн документтарҙы дөрөҫ тултырыусылар булыуы ла бик икеле. Йәғни, Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары әлегә быңдай мөмкинлеккә дәғүә итә алмай. Икенсе яҡтан, грант алған хәлдә лә, ул сумма хатта төҙөкләндереү эштәре башҡарыуға ла етмәй. Съезддан конкурс, грант, махсуслы ярҙам формаһында һәр ТЙҮ ярҙам алған өлкәләрҙең дә булыуына инанып ҡайттыҡ. Был мәсь-

ундай мәҡәл бар: бер ҡуй һыу эскән ерҙә 100 ҡуй һыуһынын ҡандыра. Был ҡанун тормошоболоҙҙоң барлыҡ өлкәләрендә лә эшләй һәм унан бер нисек тә ҡасып ҡотолоп булмай. Эш башланғанда беҙҙә лә 90 процент яҡлаһа, хәҙер ситтән генә күҙәтеүселәр ҙә бар. Әммә эшләнгән эштәрҙе күрһәләр, күңелдәре күтәрелеп китә. Ғәмәлдә, халыҡ үҙ ҡулы менән эшләгәндә һаҡлай, үҙен хужа итеп, яуаплы итеп тоя. Сөнки уға бераү ҙә көсләп ҡушмаған, улар үҙҙәре бергәләп хәл иткән һәм үҙ көстәре менән атҡарған. Кеше психологияһы шундай, ул үҙ ҡулдары менән эшләгәнде үҙенеке итеп һанай, яуаплылығы арта.

**Үҙегеҙҙең Территориаль йәмәғәт үҙидаралығын ойошторорға ҡасан ҡарар иттегеҙ һәм бөгөнгә ниндәй уңыштарығыҙ күңелегеҙҙе йылытып, рухығыҙҙы һүндермәй, киләсәккә әйҙәп тора?**

**А. Исхаҡов:** Ғүмәр ауылында был мәсьәлә 2012 йылда уҡ күтәрелә башланы. Ул ваҡытта күптәр, ғөмүмән, Башҡортостанда күптәр Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарының әһәмиәтен

кәрәк. Был халыҡ өсөн тағы ла сығымға әйләнә.

Беҙ йыл һайын Бүжә йыйыны үткәрергә ҡарар иттек. Ул ниндәйҙер кимәлдә "Шәжәрә байрамы"н да алыштыра. Ҡатнашыусылар һаны йыл һайын арта. Был өмәләр әллә ни әһәмиәтле кеүек күренмәгән саралар үткәргәндә лә күренә. Кешеләр йәйләп өйрәнә һәм берләшә бара, сираттағы сара ҡасан булыры менән ҡыҙыҡһына. Шуның өсөн Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарының активы булырға тейеш, сөнки был эшмәкәрлек өсөн бераү ҙә аҡса түләмәй, барыһы ла бушҡа башҡарыла. Ошо эштәрҙе башҡарыусы кешеләрҙе генә табырға кәрәк.

**Ш. Ишҡолова:** Территориаль йәмәғәт үҙидаралығын ойоштороуҙы 2014 йылда башланыҡ. Бында беҙгә Смаҡайҙан (Ишембай районы) Әнүәр Шәңгәрәев нығ ярҙам күрһәтте. Әлеге көндә ауыл советында ғына теркәү үткәнбеҙ, киләсәктә Юстиция министрлығының Башҡортостан идаралығында теркәлеү үтербеҙ тигән өмөттәбеҙ. Съезда ла

***Съезда ла күп тапҡырҙар билдәләнде, минең дә фекерем шундай: ТЙҮ - халыҡтың власть, бизнес менән, шулай уҡ үҙ-ара диалогы ул. Һәм әле ошо диалог яңы кимәлгә сыҡты, тип әйтергә була. Икенсе яҡтан, был ойошма халыҡтың үҙбаһаһын үҫтереүҙә лә мөһим роль уйнай. Мәҫәлән, йәйгеһен йыйын үткәрҙек, ауылдаштар шул тиклем дәртләнешеп, ҡорбан салып, милли аштар әҙерләп, ихлас ҡатнашты. Ҡаҙ өмәһе ваҡыты еткәйне, тағы дәртләнешеп киттеләр. Элек ҡар яуһа, ауылдан сыға алмай ултырған саҡтар ҙа бар ине, был мәсьәләне тиҙ арала хәл итәбеҙ. Ойошманың үҙенең ДТ тракторы бар. Әлеге көндә ошондай ойошоу, бергә булыу бик яҡшы. Юҡҡа ғына, күмәкләгән - яу ҡайтарған, тимәйҙәр бит.***

✓ **Башҡортостандағы тәүге ойошмаларҙың береһе генә түгел, ә уңышлы эшләүсе Ишембай районының Смаҡай Территориаль йәмғиәт үҙидаралығы рәйесе Әнүәр Шәңгәрәевҡа "ТЙҮ хәрәкәте отличнигы" исеме бирелә.**



# ҮҘИДАРАЛЫҠТАРЫ...

## ҡалыуға берләштерә

Ҡайһы берҙә ауыл советы башлығына йыйылған халыҡтан нимә эшләргә, ниндәй ярҙам кәрәк икәнлеген белешергә генә ҡала. Сөнки халыҡ йыйыла, үҙҙәренә тәү сиратта нимә кәрәклеген хәл итә, ә күпселек осраҡта кәрәк нәмәне үҙенден ҡулдарың менән дә эшләргә була. Әммә күмәк халыҡ менән конструктив диалог мөмкин түгел, шуға күрә рәсми йыйылыштар, күп осраҡта, һығымта, йомғаҡ яһау менән тамамланмай. Шуға күрә, Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары ауылдарҙа халыҡты актив ойоштороп, улар менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә тейеш.

Әлбиттә, бының өсөн ойошманың үҙенең структураһы булыуы зарур. Йәғни, ауыл халҡы йыйында совет һайлай, совет үҙенә рәйес билдәләй. Был борон башҡорт ырыуҙары, аҡһаҡалдары йыйынға йыйылып, йәмғиәт мәсьәләләрен хәл иткән кеүек килеп сыға. Әлбиттә, хәҙер улай киң ҡолас алмайбыҙ, бер ауыл йәки ауыл советы эсендә генә ойошабыҙ. Әммә был система беҙгә барыбер ҙә яҡыныраҡ. Ниндәй генә формацияны алып ҡарамайыҡ, унда барыбер ошондай структуралар бар. Ауылдарҙа халыҡ һаман да, совет осорондағы кеүек, эшкә бригадирҙың килеп әйткәнен көтөп ята икән, бындай структура мотлаҡ булырға тейеш. Әлеге ваҡытта күпселек ауылдар үҙ алдына йәшәй, ҡайһыларында, бәлки, старосталар барҙыр. Әммә улар ҙа бөтөн ерҙә лә түгел. Ә халыҡты, хатта юридик теркәлеү булмаған хәлдә лә, бергә йыйыу кәрәк, сөнки улар үҙ ерҙәрендә үҙҙәренең ҡулдары менән булдырғанды, төҙөгәнде, үҫтергәнде һаҡларға, яҡларға тейеш.

**Ш. Ишҡолова:** Ысынлап та, халҡыбыҙҙа бергәләшеп эшләү, бергәләшеп йәшәү борон-борондан килгән. Беҙ, йәғни ТЙҮ ойоштороусылар, халыҡ менән власть араһында бер бәйләнеш күпере һымаҡ булырға тейешбеҙҙер, моғайын. Рәсәй тарихына күҙ һалһаҡ та, ниндәй генә үҙгәрештәр булмаһын - улар барыһы ла шул берҙәмлеккә, берләштереүсе йәмғиәткә барып тәртәлә. Ләкин бөгөн беҙгә реформа, революциялар түгел, эволюцион үҙгәрештәр кәрәк.

Байрамдарға ситтә йәшәгән арҙаҡлы ауылдаштарыбыҙ ҡайта һәм үҙҙәренең ярҙамын тәҡдим итә, хәлдән килгәнсә ярҙам итәсәктәрен белдерә. Күрше Ергән һәм Ҡанбулат ауылдары уҙған быуаттың 70-се йылдарында юҡҡа сыҡты. Элек унда йәшәүселәр ҡайтып, бергәләшеп, зыяраттарын кәртәләгәс, берәү: "Ана, ҡанбулаттар әүҙем, бер-береһенә тағылышып йөрөй", тип һүҙ ҡыҫтырған, икенсеһе уға яуап итеп: "Эйе, әгәр Йомаҡ ауылы ла Ҡанбулат кеүек юҡҡа сыҡһа, һеҙ ҙә бер-берегеҙгә тотоношоп, эйәртенешеп йөрөйәсәкһегеҙ, буш ауыл урынында йыйылышып, күңелегеҙҙе баҫып, илашып таралышасаҡһығыҙ, шуға күрә хәҙер ҡулға-ҡул тотоношорға кәрәк",- тигән. Йәғни ауылдар бөткәс түгел, уларҙы һаҡлап ҡалыу өсөн бөгөн ҡулға-ҡул тотоношорға кәрәк беҙгә. Дәүләтебеҙ ауылдар менән көслө, тамырҙарыбыҙ ауылда бит. Үкенескә күрә, халыҡтың күпселеге совет тәрбиәһе алып, әҙерҙе көтөбөрәк йәшәй. Бигерәк тә ололар араһында, элек шулай ине, элек былай ине, тигән һүҙҙәр ишетергә була. Ололарға яңылыҡты аңлауы ауырыраҡ, әлбиттә. Яңылыҡты халыҡҡа таратыуы еңел эш түгел, шулай ҙа, тотонғас, тырышабыҙ инде. Ә төптәнерәк уйлағанда, был бит "велосипед"ты яңынан уйлап сығарыу түгел, борондан килгән тормош талабы. Халыҡ менән власть араһындағы мөнәсәбәткә килгәндә, үкенескә күрә, ҡайһы бер чиновниктар үҙҙәренең халыҡ хеҙмәтсеһе икәнен онотоп ебәрә.

**▸ Ысынлап та, урындарҙа халыҡ барыбер нисек булһа ла тырыша. Беләме, белмәйме, хаталанамы - һәр кем үҙ ҡаҙанында ҡайнай. Бында был эштең һүлпәнлеге республика киң мәғлүмәт сараларында халыҡҡа аңлайышлы, етерлек, тейешле мәғлүмәт юҡлыҡҡа ла бәйле түгелме икән?**

**Ш. Ишҡолова:** Килешәм, былтыр республикалағы бер ТЙҮ тураһында бер генә мәҡәлә күрҙем. Унда, әлбиттә, низағлы хәл-торош тураһында яҙылғайны. Әммә беҙҙә матур эшләгән Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары ла бар бит. Мәҫәлән, Ишембай районының - Смаҡай, Сибай ҡалаһының - Төйәләҫ, Өфө, Учалы, Белорет, Бөрө ҡалалары Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары. Киң мәғлүмәт сараларында халыҡҡа аңлайышлы, кәрәкле мәғлүмәт етерлек түгел, үкенескә күрә. Эйе, беҙ ҙә хаталанабыҙ, ләкин тырышабыҙ, хаталарыбыҙҙы төҙәтәбеҙ, алға барырға ынтылабыҙ. Ошо ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар аша ғына үҫеш юлын табырға мөмкин. Берәү ҙә бер кемгә лә бөтөн нәмәне әҙерләп, ситтәренә алтын ялатылған тәрилкәгә һалып, килтереп бирмәйәсәк.

**▸ Ауыл советтары һәм район хакимиәттәре башлыҡтары, әйтеп китеүегеҙсә, халыҡ хеҙмәтселәре Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарына ниндәй ҡарашта? Аҫтан, халыҡтан сыҡҡан инициативаны "өҫтә"геләрҙең күрергә теләмәүе арҡаһында ҡапма-ҡаршылыҡтар килеп тыумаймы?**

**А. Исхаҡов:** ТЙҮ тураһында Рәсәй Президенты Владимир Путин да белдерҙе, республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Смаҡайҙа булды, шунан һуң ошондай үҙидаралыҡтарҙы үҫтереү буйынса кәңәштәр бирелде. Хөкүмәт ултырышында ла был мәсьәлә буйынса фекер алышыу ойошторолдо. Унда Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарына "ярҙам итергә", "ярҙам итмәҫкә", "тотҡарланып торорға" тигән өс фекер яңғыраны һәм әлегә күпселек тотҡарланып тороуҙы хуп күрҙе. Сөнки ярҙам итеү һәм ойоштороу булһа, тағы ла өҫтән төшкән инициатива булып килеп сыға. "Ярҙам итмәҫкә", тиһәң дә матур түгел.

**Ш. Ишҡолова:** Дөрөҫөн әйткәндә, күптәр Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары эше нимәнән ғибәрәт икәнен аңлап етмәй. Ауыл советының һәм дә Территориаль йәмәғәт үҙидаралығының һәр ҡайһыһының үҙ вәкәләте. Бындай ойошмалар хакимиәттәргә ҙур ярҙамсы, бергәләшеп, кәңәшләшеп бер йүнәлештә эшләргә генә кәрәк.



Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путин быйылғы Мөрәжәғәтнамәһендә, ошо өлкәлә әүҙем кешеләргә ярҙам итергә, халыҡҡа ауылы, ҡалаһы менән идара итеүҙә ҡатнашыу өсөн мөмкинлектәр бирергә,

***ТЙҮ тураһында Рәсәй Президенты Владимир Путин да белдерҙе, республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Смаҡайҙа булды, шунан һуң ошондай үҙидаралыҡтарҙы үҫтереү буйынса кәңәштәр бирелде. Хөкүмәт ултырышында ла был мәсьәлә буйынса фекер алышыу ойошторолдо. Унда Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарына "ярҙам итергә", "ярҙам итмәҫкә", "тотҡарланып торорға" тигән өс фекер яңғыраны һәм әлегә күпселек тотҡарланып тороуҙы хуп күрҙе. Сөнки ярҙам итеү һәм ойоштороу булһа, тағы ла өҫтән төшкән инициатива булып килеп сыға. "Ярҙам итмәҫкә", тиһәң дә матур түгел.***

тигән аныҡ бурыстар ҡуйҙы. Республикабыҙ Йәмәғәт палатаһы рәйесе Ольга Панчихинаның сығышында ҡыҙыл еп булып, "Гражданлыҡ йәмғиәте - ул халыҡтың инициативаһын хуплау", тигән фекер үтте. Ғәмәлдә, халыҡ үҙ теләген үҙе әйтергә тейеш. Тарихта ла бар бит шундай ваҡиға: батшабикәгә килеп, ғали йәнәптәре, халыҡ баш күтәрә, тиҙәр. "Улар нимә теләй һуң?"- тип һорай батшабикә. "Икмәк ашарға теләйҙәр". "Нимәгә уларға икмәк, бәлеш ашаһындар", - була яуап. Йәғни халыҡҡа нимә кәрәк икәнен етәкселәр түгел, халыҡ үҙе хәл итергә тейеш: икмәк кәрәк икән, тимәк, икмәк кәрәк. Һәм миңә нимә кәрәк икәнен кемдер түгел, мин үҙем әйтергә тейешмен. Юҡҡа ғына, иламаған балаға имсәк бирмәйҙәр, тимәгән боронғолар. Шуға күрә, теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, өйҙә көтөп ултырғансы, ауыл йыйындарында һайланған 20 процент әүҙем кеше, халыҡ мәнфәғәтен яҡлап, ҡарар ҡабул итергә тейеш.

**А. Исхаҡов:** Ҡалаларҙа ойошторолған Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары алдында ер мәсьәләһе ул тиклем киҫкен тормай. Ауылдарҙа иһә ошо ваҡытта аҫаба ерҙәребеҙҙе һаҡлап ҡалмаһаҡ, улар яйлап ҡына ситтәр ҡулына күсәсәк. Ерҙе ҡуртымға алыусылар ҙа урындағы халыҡ мәнфәғәтен уйламай. Әгәр көтөүлектәрҙе, сабынлыҡтарҙы кемдер алһа, ҡуртым ваҡыты - 49 йыл - үткәнсе, унда берәү ҙә инә лә алмаясаҡ. Республикала йәшәүсе башҡа халыҡтар өсөн, бәлки, был бик мөһим түгелдер, әммә, тарихтан белеүебеҙсә, ғүмер буйы тыуған ере, тыуған тупрағы тип йәнен фиҙа ҡылған ата-олатайҙарыбыҙҙың аманатын үтәйбеҙ, тиһәк, беҙҙең, башҡорттар өсөн, мәсьәлә үтә лә етди.

**Ш. Ишҡолова:** Республикала Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарын үҫтереү өсөн башҡа төбәктәрҙәге кеүек программа булырға тейеш. Шулай булғанда, эшләүе еңелләшер ине. Мәҫәлән, Ульяновск өлкәһендә ТЙҮ рәйестәренә эш хаҡы түләнә, үткәрелгән сараларға финанс ярҙамы күрһәтелә. Был бик мөһим, тип уйлайым, сөнки документтар менән эшләү өсөн ҡағыҙ ҙа, буяу ҙа, башҡаһы ла кәрәк. Был, бәлки, эш хаҡы ла түгелдер, ә канцелярия сығымдарын ҡаплауҙың бер ысулылыр.

**▸ Республикала һәр ойошманың тигәндәй үҙ ассоциацияһы бар, бәлки, Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтары ассоциацияһын булдырыу мәле еткәндер? ТЙҮ ойошторорға теләүселәр, эшләүселәр шунда килеп консультациялар алыр ине - кәңәш ҡорор урын булырға тейештер бит?**

**А. Исхаҡов:** Был хаҡта һөйләшеүҙәр булды, эшләргә кәрәк, әлбиттә, әммә әлеге ваҡытта ул ойошма сығымдар талап иткәнлектән, был инициатива ғына булып ҡала. Йәиһә, быны финанслауҙың ниндәйҙер варианттарын ҡарап, күҙаллап, маҡсатҡа ярашлы алып барырға кәрәк. Бында барыбер ҙә бюджетҡа нигеҙләнгән программамы, нимәләр булырға тейеш. Йәки "аҫтағыларҙың" нығыраҡ әүҙемләшеүе кәрәк. Әммә был инде оҙаҡҡа һуҙыласаҡ оҙайлы юл. Шуға күрә, башҡа төбәктәрҙәге кеүек, Территориаль йәмәғәт үҙидаралыҡтарына ярҙам итеү үҙәктәре ойоштороу ваҡыты еткәндер. Төрлө төбәктәрҙә ассоциация, ТЙҮ-гә ярҙам итеүҙең ресурс үҙәктәре, фондтар бар икәне мәғлүм. Улар тап ошо маҡсаттан ойошторолған да инде. Уларҙа семинарҙар уҙғарыла, ҡайһы бер урындарҙа үҙәкләштерелгән бухгалтерия алып барыла. Уйлап ҡараһаң, әгәр ауыл халҡының 70 процентын пенсионерҙар тәшкил итә икән, кем бухгалтерия эше менән булып ултырһын инде. Ә бюджет аҡса бүлде икән, уның һәр бер тине өсөн яуап бирергә кәрәк. Әгәр бер тинең тулмаһа ла, был хоҡуҡ боҙоу булып тора. Үҙидаралыҡтар ойошторған хәлдә лә кешеләр ошо эштәрҙе шунда уҡ үҙҙәре алып бара алмаясаҡ, шуға күрә ярҙам итеү үҙәгеме, нимәлер ойоштороу буйынса, әлбиттә, республика етәкселегенең ҡарары булырға тейеш.

**Ш. Ишҡолова:** Бында тәжрибәле юристарҙың эшләүе бик мөһим. Мәҫәлән, белемем булһа ла, юриспруденция буйынса үҙемде көслөмөн тип әйтә алмайым. Закондың һәр һөйләмен нөктәһенә тиклем аңлау өсөн ошо өлкәләге тәжрибәле белгес булыу кәрәк. Ойоштороласаҡ ассоциацияла тәжрибәле юрист булыуы, әлбиттә, мотлаҡ. Сөнки яңы башлаған эштә бик күп юридик һорауҙар тыуасаҡ бит.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Съезда күберәген ҡалаларҙағы ойошмалар тураһында һүҙ барһа ла, наградланыусыларҙың күпселеге ауылдыҡылар була. Шул иҫәптән, Башҡортостандағы тәүге ойошмаларҙың береһе генә түгел, ә уңышлы эшләүсе Ишембай районының Смаҡай Территориаль йәмғиәт үҙидаралығы рәйесе Әнүәр Шәңгәрәевҡа "ТЙҮ хәрәкәте отличнигы" исеме бирелә. Был инде беҙҙә лә матур өлгөләр булыуын, бары тик шуға тиңләшеү һәм шундай уҡ кимәлгә ынтылыу өсөн ТЙҮ ойоштороусыларға киләсәккә маҡсат булып тора.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**



# ФӘҺЕМЛЕ ФЕКЕРҘӘР

## Атта ла, тәртәлә лә...

Тауыҡтары: "Ана, ҡарға, исмаһам, текә егет, ул заманса ҡысҡыра", - тип гәрләндерә торғас, әтәс мәсхәрәләргә түҙмәгән, бер көндө ҡарҡылдарға керешкән. Һөрән һалыуға былай ҙа һәләтле әтәскә ҡарҡылдарға өйрәнеү бер ни тормағандыр инде. Һарай-ҡура тирәһендә әтәстең әтәслек тауышы ишетелмәгәс, кетәгенә күрше-тирәнән теләһә кем, теләһә ҡайһы ваҡытта иркен инеп йөрөй башлаған. Уға эйәреп, барлы-юҡлы тауыштары менән кемуҙарҙан ҡарҡылдашып йөрөгән ҡоштарҙың кеме кем икәнен дә айырып булмай икән: ҡайһыныһы әтәс, ҡайһыныһы тауыҡ, эт белһен! Ураған һайын һәр береһенең ҡойроҡ аҫтын ҡарап йөрөп булмай бит инде.

Ғибрәт, ләкин әтәс-инәләре ҡарҡылдап йөрөгән арала морон төрткән себештәре лә уларҙан ҡалмай ҡарҡылдаша икән. Йоморҡа эсендә ятҡанда уҡ шул тауышты ғына ишеткәс, башҡа нимәгә өйрәнһендәр, ҡарҡылдауҙан башҡа хәлдәре юҡ. Ҙурайғас, үҙҙәре лә себештәрен ҡарҡылдарға ғына өйрәтә алырҙар инде...

"Атаһы йыраусы булғас, әтәстең улы ла йырлай", тигән булғандар борон. Ә хәҙер? Хәҙер ҙә шулай. "Атанан ҡурған уҡ юнған..." тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһе лә, бәсе лә ғәмәлдә. Шуға күрә, бөтә гонаһтарында йәштәрҙең үҙҙәрен генә ғәйепләү дөрөҫ түгел. Тәбиғәттәренә хас булмаған алама ғәҙәттәрҙе улар үҙҙәре уйлап тапмаған, өлкәндәрҙән өйрәнгән. Өлкәндәрҙең ҡыланыштары көн һайын күҙ алдында булғас, йәштәр ҙә шул ауырыуҙы йоҡтормай, ҡайҙа барһын? Иң алда өлкәндәр үҙҙәрен тыя белһен, үҙҙәрен тәрбиәләһен ине. Дөрөҫөн әйткәндә, ғәйеп атта ла, тәртәлә лә бар. Ат ҡайҙа бара, тәртәнең дә шул яҡҡа боролмай хәле юҡ!

Кемдең тормош тәжрибәһе күберәк, шуның намыҫында яуаплылығы ла күберәк булырға тейеш икәнен таныу файҙалы ла, гүзәл дә булыр ине кешеләргә...

## Ҡотҡо

Бер мәл йомрандар өңдә йәшәүҙәренән гәрләнеп, тейендәр кеүек, ағас башында йәшәргә булып киткән. Өңдә йәшәү, йәнәһе, иҫкелек ҡалдығы, элек аңһыҙҙар ғына унда йәшәгән, хәҙерге заманда ағас ҡыуышы йәшәү өсөн иң шәп урын, унда яҡты, унан тирә-яҡ яҡшы күренә һ.б. Ниәтләгәндәр. Йылғыр күршеләре йүгереп йөрөп сыбыҡ-сабыҡ, үлән-мүлән ташып, оя ҡорорға ярҙам итешкән."Заманса" йәшәүгә үҙгәрешле "йыуғандан" һуң, ярҙамсылары өйҙәренә таралышҡан да, ситтән генә быларҙың тормоштары күҙәтә башлаған, ти. Тормоштарына ҡыҫылып, аҡыл да өләшкеләгәндәр. Нисек ағас башында дөрөҫ йәшәргә, ҡалайтып аҫҡа, өҫкә үрмәләргә өйрәткәндәр. Үҙ йүндәрен күреп өйрәнгәнсә тип, үтескә ризыҡ-маҙары менән дә бүлешкәндәр. Ни тиһәң дә, төрлө яҡлап ҡурсалағандар, үҙҙәре кеүек йәшәргә ризалашҡандары өсөн ҡыуанғандар, сөнки мәсьәләнең сетерекле ягын улар үҙҙәре генә белгән бит.

Күршеләрен дә ағасҡа мендереүҙәренең хикмәте, баҡтиһәң, ағастан ергә өҙөләп төшкән емдәрҙә икән. Яландарҙа иген үҫкән осорҙа ризыҡҡа ҡытлыҡ артыҡ һиҙелмәһә лә, игендәрҙе һуғып йыйып алғас, бөтә йәнлектәрҙең күҙ тереп торғаны шул ағас баштары. Ҡасан, ҡайҙа бер бөртөк ем өҙөләп төшкәнен көтә лә йөрөйҙәр. Бер-икәү генә көтөп йөрөһә - бер хәл, улар кеүек ас ҡорһаҡтар бихисап бит әле.

Әүәлерәк тейендәргә ергә төшкән бер бөртөк тә ем тәтемәй ине. Сөнки ерҙә сабышып йөрөгән йылғыр йомрандар бөтәһенән дә өлгөрөм: улар ояларынын ситендә генә көтөп ултыралар ҙа, йә ояларынан йүгереп кенә сығалар ҙа, өҙөләп төшкән һәр емде өңдәренә ташыйҙар. Был тигеҙһеҙлеккә тейендәрҙең күптән һарыуы ҡайнап йөрөй ине, теләктәре тормошҡа ашты: йомрандар ярышып ҡараһын хәҙер улар менән!

Яттың ҡотҡоһона бирелеп, "яңыса" йәшәй башлаған йомрандар тәүҙәрәк бер этлек тә һиҙмәйҙәр. Улар яңы тыуған унайлыҡтарға һоҡланып, яңы мөмкинлектәр менән мауыҡалар: тирә-яҡты күҙәтәләр, сыбыҡта бәүеләләр, ботаҡтан ботаҡҡа һикерергә өйрәнәләр. Күршеләре уларҙы вайымһыҙ йәшәүгә дәртләндереп, ашатып, эсереп, ҡеүәтләп кенә торалар.

Тейендәргә нисек булһа ла уларҙы ошо хәлдәренә күндерергә кәрәк бит: ни тиклем тиҙерәк ерҙән айырылһалар, киләһе быуындары кире өңдә йәшәргә теләмәйәсәк. Ул ваҡытта кемдәр был шарттарҙа йәшәргә һәләтле, шулар был мөхиткә хужа булыр, тоҡомон үрсетер, ә икенселәр, үҙҙәренсә йәшәү һәләтен юғалтыу һөҙөмтәһендә, бөтөнләй юҡҡа сығыр...

## Инженер "Ю"

Ҡытай империяһын Сян династияһы етәкләгән дәүерҙә Һыуҙар менән идара итеүсе Гун исемле вәзиргә халыҡ "Ҡытай диңгеҙе" (хатта "Китайское море - китайское горе") тип атаған Хуанхе йылғаһының ағымын ауыҙлыҡлау бурысын ҡуйған. Ул йылға Тибет тауҙарында башланып, 4 мең 200 километрҙан ашыу юл үтеп, диңгеҙгә ҡоя. Тауҙарҙа даими булып торған ҡойма ямғырҙарҙан йылға ташып, йыл әйләнәһенә биш-алты тапҡыр ундырышлы туғайҙарҙы һыу баҫҡан. Әлбиттә, бөтә уңыш юҡҡа сыҡҡан. Һөҙөмтәлә - ҡыйралыш, емереклек, аслыҡ, кешеләр, мал-тыуар ҡазаланған, йөгошло ауырыуҙар ҡоторонған.

Вәзир Гун бер йыл буйына йылға үҙәнендә йәшәгән ябай халыҡ, аҡһаҡалдар, һыу эше оҫталары, канал төҙөүселәр менән осрашып, кәңәшләшә. Аҡса, кәрәкле оҫталар, материал туплап, икенсе йылына ҡумәкләп эшкә тотоналар. Хуанхе йылғаһын үргә ағымынан, Тибет тауҙарынан төшкән ерҙән башлап, биш-алты урындан быуалар. Тәүҙәрәк йылға ағымы элекке көсөн юғалтҡан кеүек тойола, быны күргән һыу быуыусы оҫталар тағы ла дәртләнеп эшкә керешә. Ләкин беренсе шәп яуып үткән ямғырҙан һуң уҡ төүге быуа йырылып, икенсеһен алып китә, уныһы өсөнсөһөн йыра... Шулайтып, бәләкәй генә ямғыр илгә элеккегә ҡарағанда ла ҙурыраҡ афәт килтерә. Һөҙөмтәлә, йыл буйы башҡарған эш юҡҡа сыға. Вәзирҙең башын киҫәләр...

Вәзирҙең ун йәшлек "Ю" исемле малайы ҡала. Ул атаһының фажиғәһенә ныҡ гәрләнә. Ун йәшенән Хуанхе йылғаһын күрә алмай һәм ваҡыт үтеү менән, күңелендә йылғаны ауыҙлыҡлап, атаһы өсөн үс алыу теләге тыуа. Нимә эшләрен белмәгән көйө, ул йылғаның үҙәндәрен йөрөп күҙәтә, һыу ағымы үҙенсәлектәрен өйрәнә башлай. 20 йәше тулғас, императорға Хуанхе йылғаһының ағышын буйһондора алыуы тураһында белдереп мөрәжәғәт итә. Уның кем балаһы булыуын белмәгән император, Гун исемле вәзиренең яҙмышы тураһында һөйләп, әгәр Юның эше уңышһыҙ булһа, уны ниндәй яза көтөүен иҫкәртеп, рөхсәт бирә. Ю ике йылда Хуанхе йылғаһын Тибет тауҙарынан диңгеҙгә ҡойған тамағына хәтлем йәйәү йөрөп сыға һәм нимә эшләргә кәрәк икәнен төшөнә. Атаһы кеүек, электән билдәле ҡалыпҡа буйһоноп, йылғаны быуһа, шул уҡ уңышһыҙлыҡҡа дусар булырын аңлай. Шуға күрә, ул үҙенсә эш итә - ярҙарын быуыу урынына, киреһенсә, йылғаның тамағын киңәйтергә ниәтләй. Хуанхе йылғаһының үҙәне киңәйтелеп, төрлө урындарҙа яңы каналдар ҡаҙыла.

Был эштәр 13 йыл буйына дауам итә. Һәр яңы төҙөлгән канал асылған һайын, йылғаның ағымы тыйыла бара. Көслө ямғырҙар булып үтә, ел-дауылдар ҙа була. Ҡыштан һуң элекке ҡурҡыныслы яҙ ҙа етә, тауҙарҙан ҡар һыуҙары урғылып ағып төшә, ә йылға ташмай. Илде ҙур ҡыйралыштар килтергән афәттән, халыҡты аслыҡ, сир, хәсрәттәрҙән ҡотҡарған Юға халыҡ "Бөйөк инженер Ю" тигән исем бирә.

Бына шулай, бер хеҙмәттең ике төрлө һөҙөмтәһе өсөн ике кеше ике төрлө баһа ала. Билдәле ҡалыпты инҡар итеп, хәлгә яңыса, үҙенсә ҡараған кеше ота тормошта.

Был хикәйәнән тағы ла бер фәһем алырға була: тормош юлында килеп тыуған һәр бер ҡаршылыҡ йән ҡыйырлыҡ ҡаршы торорға лайыҡ түгел! Ҡайһы берҙә ҡаршылыҡты урап үтеү, ҡыйынлыҡҡа тура килеү яҡшыраҡ.

## Исаак Ньютон

Үҙ дәүерендә математикала дифференциаль тигеҙләмәләрҙе сисеүҙә яңы ысулдар уйлап табып, геометрия, астрономия фәндәрендә бөйөк асыштар яһап танылған И. Ньютонға (1642-1727) 1695 йылда монеталар сығарыу эшен йәйға һалырға ҡушалар. Был хәлдең сәбәптәре лә була: ул мәлдә илдең төрлө төбәктәрендә үҙҙәре етештергән төрлө аҡса йөрөй. Шул арҡала алыш-биреш, һатыу, сауҙа эшендә алдашыу, мутлашыу һәм башҡа буталыштар киң таралып, империяның ҡаҙнаһына ҙур зыян килтерә. Тиҙ арала яңы монеталар сығарыуҙы ойоштороп, эште йәйға һалыуға өлгәшкән И. Ньютонға намыҫлы хеҙмәте өсөн "сэр" исеме биреп, парламентҡа депутат итеп һайлап ҡуялар.

Заманына ярашлы үҫеш алған яңы фәндәрҙә ҙур асыштарға өлгәшеп, бөтә донъяла тиерлек ғалим дәрәжәһе яулаған аҡыл эйәһе ғәҙәти тормошҡа һәм унда барған хәлваҡиғаларға әллә ни иғтибар бирмәүе менән билдәле була. Көндәлек тормошта нимә ашауы, кейеүе һәм башҡа йәшәйеш ихтыяждарын нисек ҡәнәғәтләндереүенә ул битараф булғанмы, әллә килеп тыуған ябай ғына хәлдәр алдында юғалып ҡалғанмы, әйтеүе ҡыйын. Ләкин ул фәҡәт шундай кеше булған, тип раҫлай замандаштары үҙҙәренең тарихи яҙмаларында.

Мәҫәлән, өс срок парламент депутаты булыу осоронда ултырыштар барған мәлдә уның бер тапҡыр ғына: "Тәҙрәне ябығыҙ, өрә", - тип йыйылыш барған залдың хеҙмәткәрҙәренә мөрәжәғәт иткән һүҙҙәре стенограмма яҙмаларына теркәлеп һаҡланған. Танылған аҡыл эйәһенең парламентта ҡаралған һорауҙар буйынса үҙ фекере бөтөнләй булманымы икән? Булһа ла, әйтмәгәнме? Оялғанмы, ҡыйынһынғанмы, ғәжәп! Хәҙерге депутаттар араһында ла, бер нисә срок халыҡ вәкиле булып һайланып, бер ауыҙ һүҙ әйтмәгәндәр бар бит, билләһи...

Тағы ла бер ҡыҙыҡ миҫал. Уның йортона килгәндәр урамындағы эт ояһының ҙур һәм бәләкәй ике ауыҙы булыуын күреп аптыраған. "Бер ояға нинә ике тишек кәрәк? - тигән һорауҙарға Ньютон: "Береһе бәләкәй эттең тишеге, икенсеһе - ҙур эттеке", - тип тағы ла аптыратҡан ахмаҡ һорау биреүселәрҙе. "Ике эт тә ҙур тишектән сығып йөрөй ала бит", - тип ныҡышҡандарға ул: "Ниңә бәләкәй эткә ҙур тишек?" - тип, ауыҙҙарын япҡан.

"Бына һиңә бөйөк ғалим!" тип ҡысҡырып берәү. Ә уйлап ҡараһаң, Ньютондың сәйер ҡылығында логика юҡ тип иҫбат итеп тә булмай! Бәлки, ябай кешеләр уның кеүек уйлай ҙа, мәсьәләнең асылын уның кеүек күрә лә, сисә лә белмәйҙәр. Шуға күрә, ябай кешеләр, тормош мәсьәләләрен хәл итеүҙә унан күпкә тәжрибәле, оҫта булып та, тәжрибә, оҫталыҡ, белемдәрен билдәле ҡалып сиктәрендә генә файҙаланыуы арҡаһында, бөйөк асыштарға һәләтле түгелдәр. Мәслихәт...

Тормошта кешеләр төрләләре, етәкселәре, депутаттары һәм башҡа юғары органдарға үҙҙәре һайлап йә тәғәйенләп ҡуйған вәкилдәренә әллә ниндәй талаптар ҡуйып, уларҙан бөйөк уңыштар, ҡаҙаныштар көтә. Ә уларҙың күптәре башҡалар һымаҡ уйлаған, эшләгән, йәшәгән ҡәҙимге ябай кешеләр. Бәлки, ҙур өмөттәр бағлап та, уңыш көтөп ала алмағаны өсөн кешеләр үҙҙәренең етәкселәрен яратмайҙыр. Бер уйлаһаң, башҡалар кеүек, ябай кешеләр булғас, бында уларҙың ни ғәйебе?..

**Урал МОСТАФИН.**

✓ *Уларҙы бөгөн йәш йырсы тип атарға тел дә әйләнмәй, сөнки тап уларҙың быуыны еңел-елпе йырҙар шауҡымына ла бирелмәне, халҡыбыҙҙың моңло йырҙарын йырлауҙан да баш тартманы, еңел юл һайламаны.*



*ИЖАДХАНА*

**Оҙон көйлө йырҙарға бай халыҡтың моңло йырсылары ла күп булырға тейеш инде ул. Быуындан-быуынға тапшырып, ҡәҙерләп һаҡлаған халыҡ йырҙары бөгөнгө заманда тап уларҙың башҡарыуында яңғырай. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ - Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артисы, "Карауан" фольклор-эстрада төркөмө солисы, Халыҡ-ара һәм республика конкурстары лауреаты Рөстәм ШАҺЫБАЛОВ тап ошондай һәләтле йырсылар рәтенән булыр.**

# ХАЛЫҠ ЙЫРЫ...

## ижадым асылы, юлдашым ул

### "Карауанһарай" тағы үҙгәрҙе...

2005 йылда Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлап, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһына эшкә килгәс, мине "Карауанһарай" эстрада-фольклор төркөмөнә ҡабул иттеләр. Уҡып йөрөгән саҡта "Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамблендә йыл ярым тирәһе эшләүемде иҫәпләмәһәң, мин "Карауанһарай" төркөмөнә тоғромон, тип әйтә алам. Мин килгәндә төркөмдөң тәүге составы үҙгәргәйне, Мәхмүт ағай Нәҙершин ғына тороп ҡалғайны. Уның етәкселегендә йырсылар Заһир Иҫәнсурин, Эльмир Әбүбәкиров, ҡурайсы Рәдиф Бохарбаев, бейеүселәр Юлиә Чиглинцева-Ғәбитова, Рафаэль Сәғитовтар менән данлы төркөмдөң эшен дауам итергә тура килде.

Хәҙер Мәхмүт Нәҙершин беҙҙе үҙаллы ижад юлына сығарҙы, күптәр белеп тә етмәйҙер, төркөмдөң исемен дә "Карауан" тип үҙгәрттек. Тотошлай үҙгәреш кисерҙек, тип әйтеп булмай, маҡсатыбыҙ ҙа юҡ бындай. Ваҡытында ҙур танылыу яулаған легендар төркөмдө юҡҡа сығарып ҡуйыу дөрөҫ булмаҫ ине, бөгөн дә уның үҙенең тамашасылары бар. Яйлап репертуарҙы тулыландырабыҙ, электән йырлаған йырҙарҙы ла башҡарабыҙ, сөнки улар төркөмдөң визит карточкаһы. Үҙебеҙ ҙә йырҙар яҙабыҙ. Әлеге мәлдә төркөмдә минән башҡа Эльмир Әбүбәкиров, Марсель Ҡотоев, Тимур Рамазанов һәм ҡурайсы Илнур Хәйруллин эшләй.

### Һәр кемдең үҙ тамашасыһы

Башҡорт эстрадаһы барлыҡҡа килгән генә мәлдә тамашасы йырсыларға ҙур иғтибар күрһәтә ине. Ҡайһыларға гримеркаһынан сығырға ла ирек бирмәй торғайны йәш ҡыҙҙар. Бөгөн тамашасы һөйөүенә лайыҡ йырсылар һирәктер, һәр хәлдә, ни өсөндөр улар битараф кеүек тойола. "Гәлсәр һандуғас" проекты менән гастролдәргә йөрөгәндә автограф һораусылар бар ине. Йыл буйына клиптар төшөрҙөләр, реклама ла шәп бара ине. Телевидение, радионан йырҙар яңғырап тора торғайны. Концерттарға халыҡ залды тултырып килә - бик күңелле осор булып хәтерҙә ҡалған "Гәлсәр һандуғас".

Гел күҙәтеп, сағыштырып йөрөйөм, беҙҙең төркөмдөң тыңлаусылары - урта һәм өлкән йәштәге апайҙар. Гастролдәр менән ҡайҙа ғына барһаҡ та, һәйбәт йырлайһың, тип, арҡанан һөйөп китәләр. Состав, репертуар үҙгәрә, тамашасыларыбыҙ үҙгәрмәй. Быны төп сәбәбе - репертуарҙа, тимәк, беҙҙең йырҙар уларҙың күңеленә яҡын. Минең үҙемде тамашасы башҡорт халыҡ йырҙарын, ретро йырҙарҙы башҡарыусы тип белә.

### Йырсылар нәҫеленән

Мин Әбйәлил районы Амангилде ауылында тыуып-үҫтем. Атайым мин бәләкәй саҡта ла өйҙә лә, сәхнәлә лә гел йырлай ине. Йырларға унан өйрәнгәнмендер. Тәүге тапҡыр сәхнәгә өс йәштә сыҡтым. Баланың йыр-бейеүгә һәләте булһа, ул бала саҡтан уҡ күренәләр ул. Әле бына улыма ике йәш була, бәлки, киләсәктә йырлап та китер, әммә әлегә ундай һәләте артыҡ тойолмай. Мин улымды үҙем дә артист итеп күргем килмәй. Ә әсәйемдәр мине, йырсы булһын, тип, үҙҙәре Өфө сәнғәт училищеһына алып килде, хатта минең теләгемде һорап та торманылар шикелле. Бала саҡта бар малайҙар ҙа шофер булырға хыяллана, минең дә машина йөрөткөм килә ине. Әсәйем йырламаһа ла, уҡытыусы булараҡ, ауылдың мәҙәни тормошонда ҡайнап йәшәне, сәхнәнән шиғыр һөйләй ине, концерттарҙы алып бара торғайны. Бер туған ағайым да, атайымдың бер туғандары ла оҫта йырлайҙар.



Училищела - Башҡортостандың халыҡ артисы, яҡташым Вәхит Хызыровтың, Өфө дәүләт сәнғәт институтында Миләүшә Мортазина класында уҡыным. Институтта бер йыл академик йыр йүнәлешендә белем алдым, унда опера йырсыларын әҙерләйҙәр. Ауылда йәшел сирәмдә тәгәрәп, халыҡ йырҙарын тыңлап үҫкән егетмен, был йүнәлеш күңелемә бөтөнләй ятманы. Уҡытыусыларым аңланы, халыҡ йыры буйынса тамамланым уҡыуҙы. Кеше бөтөн нәмәгә, хатта нисек дөрөҫ йәшәргә лә ғүмере буйына өйрәнә. Тауыш өҫтөндә лә шулай эшләйһең, ғүмереңбуйына йырларға өйрәнәһең. Бер үк йырҙы бер төрлө йырлайһың, әммә ул һәр саҡ яңыса яңғырай, шулай сығышыңды яйлап-яйлап камиллаштыраһың, шымартаһың. "Сәхнәгә сығаһың икән, йырҙы еренә еткереп йырла", - ти торғайны уҡытыусыларым, бөгөн дә мин уларҙың был кәңәшен иҫемдә тотам, үҙемә ныҡ талапсанмын.

### "Уйыл ғына һыуы..."

Күңел өсөн бер сәхнәгә сыҡһаң, уға гел сыҡҡы, йырларға бер өйрәнһәң, йырлағы килеп тик тора. Шундай тартымы бар сәхнәнең. Ҡайһы берҙә донъя баҫып китә, ижад кешеһенең һынылышлы мәлдәре лә була. Әсәйем мәрхүмә булғас, минең дә шундай һынылыш мәле булды бер. Сәхнәгә лә сыҡҡы килмәй, икенсе яҡтан, сәхнәнән китеп тә булмай. Шуны үткәреп ебәрә алһаң, тормошоң тағы ла үҙ һуҡмағына төшөп, һәүетемсә тәгәрәй башлай. Һәр кем һағышын, күңел һыҙланыуҙарын үҙенсә сығара, бейеүсе - бейеп, йырсы - йырлап.

Электән "Уйыл" йырын яратып башҡарам. Уның төрлө варианттары бар. Мин йырлаған йыр шулайыраҡ яңғырай: "Уйылып ҡына аҡҡан Уйыл һыуы, уйландыра уйсан да ирҙәрҙе, уйландырып ҡалмай, моңландыра, һағындыра тыуған ерҙәрҙе". "Уйыл"ды йырлаһам, тыуған яғымды, туғандарымды һағыныуым баҫылып, күңелгә рәхәт булып ҡала. Былай эстән генә, ишетелер-ишетелмәҫ кенә халыҡ йырҙарын йырлап йөрөйөм гел...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тотош бер төркөм булып башҡорт эстрадаһына килеп ингән шәп, һәләтле, моңло йырсыларҙың береһе ул Рөстәм. Уларҙы бөгөн йәш йырсы тип атарға тел дә әйләнмәй, сөнки тап уларҙың быуыны еңел-елпе йырҙар шауҡымына ла бирелмәне, халҡыбыҙҙың моңло йырҙарын йырлауҙан да баш тартманы, еңел юл һайламаны. "Карауан" төркөмө лә һәр ерҙә, һәр төбәктә башҡорт сәнғәтен, башҡорт мәҙәниәтен башҡаларға таныты бурысын лайыҡлы башҡара.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*




**Йылайыр районында урынлашҡан Һабыр беҙҙең төбәктә киң билдәле ауылдарҙың береһе. Заманында улыс үҙәге иҫәпләнгән, ике мәсет тотҡан ауылдан ике фән докторы, фән кандидаттары, ике Яҙыусылар берлеге ағзаһы, ике "Йыл уҡытыусыһы" ярышында еңеүсе, орден-миҙалдарға лайыҡ булған, маҡтаулы исемдәр алған бихисап шәхестәр сыҡҡан. Унда шиғри күңелле, йор, тапҡыр һүҙле, мәрәкәсел, йыр-моңға әүәҫ, әммә саяраҡ, алабарманыраҡ холоҡло, өҫтәүенә бер ҡатлы, сабыйҙай юҡ-барға ышанып барыусан халыҡ йәшәй. Әле хисаплаған сифаттарға ожмахҡа тиң тәбиғәт тә йоғонто яһайҙыр, бәлки. Ҡайтҡан һайын ауылдаштарымдан күңелемә яҡтылыҡ, йылылыҡ, йәнемә майҙай яғылған ихласлыҡ алып китәм. Гәзит уҡыусыларға уларҙың хәтеремдә ҡалған ҡайһы бер мәҙәктәрен тәҡдим итәм. Мәрәкә геройҙарының күптәре мәрхүм, ҡайһы берәүҙәре тормошто ҡыҙыҡтары менән йәмләп, һаман да арабыҙҙа йөрөп ята. Яҙғандарым лаҡап, ҡарһүҙ булып күптән халыҡ араһында йөрөгәс, көләмәс эйәләренең исемен үҙгәртеп алдым.**

### Күҙеңде йом, әбей!

Беҙҙә һуғыш ветераны йәшәне. Ғүмере буйы күрше ятҡан Васильевка ауылынан ат менән почта ташыны, шунан пенсияға сыҡты. Йыуаш, әҙәпле, йомшаҡ һүҙле ине ул. Эргә-тирәһендәгеләргә ҡатырғанып, төрпө өндәшеүен хәтерләмәйем. Бер заман ҡарсығы бының теңкәһенә тейә башлай, сабырлығын юйҙыра, түҙемен өҙә. Бабай, яһилланып, әбейен ҡаты ғына итеп бәргесләп алырға әҙерләнеп бөткәс, тегеһен етәкләп өйгә индерә лә, мөйөшкә ҡыҫырыҡлап, дебет шәл менән елпетә башлай, үҙе ыңғайына хәстәрлекле һамаҡлай икән: "Хәҙисә, мин һуҡҡанда абайла, шәлдең сәсәге күҙеңә тейеп ҡуймаһын!.. "

### Арыһаң, ҡал да ҡуй

Ауылыбыҙҙан ете-һигеҙ саҡрым ерҙә Бараҡал йылғаһы буйында "Анна осҡан" ҡаяһы бар. Атаманың килеп сығыуы үҙе бер тарих, уға туҡталып тормайым, һүҙем икенсе нәмә хаҡында. Шул ҡая эргәһендәге туғайлыҡты бейек-бейек тауҙарға һылашҡан әҙәм үтмәҫлек шырлыҡ уратҡан. Ғәйфулла ағайҙың сабынлығы шунда. Ара йыраҡ булғас, бесән осоро етһә, ҡыуыш ҡороп, ҡатыны менән ҡуна ятып эшләйҙәр.

Бер көн арбаға йәшел бесән тултырып, атты шунда бәйләп, үҙҙәре ҡыуышҡа инеп маҙырап йоҡларға яталар ти былар. Таң алдынан йылға буйында айыу үкергән тауыш ишетелә. Ат үрәпсеп ушҡырып ебәрә. Ғәйфулла ағай ырғып тороп, һыбай атланып, сабып китә, хәтәр мәлдә бисә ҡайғыһымы! Ә тегеһе теҙгенгә йәбешеп, йәнәшәһенән етеҙ юрғалай, айыуҙан һуғылырға бер ҙә генә лә самаһы юҡ. Ир ғәзизен йәлләгәндер, күрәһең, уны ҡайғыртып, былай тип әйтә ти: "Файза, хәлдән тайҙың бит инде, улайтып күпме барырға мөмкин, арыһаң, ҡал да ҡуй!"

### Мотоциклымды аттым!

Ул саҡта ауыл Советы башҡарма комитеты рәйесе вазифаһында эшләп йөрөгән саҡ. Эшкә барышлай күрәм, Ишҡәле өс көн буйы "Урал" мотоциклын ремонтлап аҙапланды, шунан тағы ике көн тоҡандыра алмай этләнде. Төшкө аштан һуң ағайҙың өйө тапҡырынан үтешләй мылтыҡтан атҡан тауыш ишеттем. Бер аҙҙан ҡапҡа ауыҙында хужа үҙе күренде. Ул талсыҡҡан кешеләй баҡса ултырғысына барып аушайҙы, тәмәке тоҡандырҙы. Янына барып сүктем, хәлен белештем:

- Мотоциклың, ниһайәт, ут алдымы?

Ишҡәле тәмәкеһен быҫҡытып, вайымһыҙ ҡул һелтәне:

- Мотоцикл тигән нимә юҡ инде, ҡустым, ул үлде...
- Нисек?
- Мин уны аттым!

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Ташты һыу эсенән сығарып, ҡулына алыуы була, көн торошо ҡапыл үҙгәрә. Донъя ҡараңғылыҡҡа сума: көслө дауыл ҡуба, томан кеүек нәмә бөтә ерҙе солғап ала. Шул саҡта өләсәйем иҫен юғалта.*



## ИНТЕРНЕТТАН



# ТОҘҘО КҮП АШАМА

■ Тоҙ ҡулланыуҙы кәметеү йөҙәр мең кешенең ғүмерен һаҡлап алыуға булышлыҡ итәсәк, ти күптән түгел генә үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙең авторҙары. Тоҙ - натрий хлориды тип аталған химик берләшмә. Натрий хлоридының 60 проценты хлорид, ҡалған 40 проценты натрий. Тап натрий сәләмәтлеккә зыян килтерә лә инде. Йөрәк ауырыуҙарын өйрәнеүсе Америка ассоциацияһы көнөнә 1,5 миллиграмм натрий ҡулланырға кәңәш итә. Әммә күптәр уны күберәк тотона, был һан сама менән 306 миллиграмм тәшкил итә, тимәк, норманан ике тапҡырға артып китә. Тоҙҙоң кеше организмына йоғонтоһон тикшергәндә натрий ҡулланыуҙы йәйләп ҡына кәметеүҙең һөҙөмтәһен күреү өсөн ғалимдар компьютер ярҙамын ҡулланған. Ун йыл эсендә тоҙ ашауҙы аҙлап ҡына кәметеү ҙә яҡынса 500 мең кешенең ғүмерен һаҡлап ҡаласаҡ, ти улар.

■ Һәйбәт итеп туҡланыу тигәндә күптәр сифаты буйынса уникаль, шул уҡ ваҡытта ҡиммәт ризыҡтарҙы күҙ алдына баҫтыра. Ғалимдар билдәләүенсә, өҫтәлдәрҙәге ябай ғына аҙыҡтар ҙа файҙалы, тик беҙ был турала уйланмайбыҙ ғына. Мәҫәлән, Британияла ҡыҙыл сөгөлдөрҙө тикшереп, уның һуты кешенең сыҙамлылығын 16 процентҡа арттыра, тигән фекергә килгәндәр ғалимдар. Бәктиһән, ҡыҙыл сөгөлдөрҙә организмды кислород менән байытыусы тоҙҙар бар икән. Шуға ла был йәшелсә спортсыларға, йөрәк-ҡан тамырҙары менән ауырыусыларға ярҙам итә. Сөгөлдөр һуты юғары ҡан баҫымын түбәнәйтә, 24 сәғәт буйына был һөҙөмтә һаҡлана. Стресс мәлендә йоҡлай алмағандар, хәтере насарайыусылар сөгөлдөр һутын төнгөлөккә эсһен.

■ Боронғо гректа һарымһаҡты насар еҫле рауза тип йөрөткән. Йәғни, ҡырҡыу еҫе был йәшелсәнең берҙән-бер кире яғы. Борондан һарымһаҡ изге ризыҡ иҫәпләнгән. Һарымһаҡты турау менән аллицин тигән берләшмә барлыҡҡа килә, был матдәне 1944 йылда Америка белгестәре асҡан һәм ул тәбиғи антибиотик иҫәпләнә. Ғалимдар раҫлауынса, аллицин ҡан тамырҙары һәм йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡандың липид составын нормаға килтерә, артериаль ҡан баҫымын йәйлай, яман шештән һаҡлай. Аллициндан тыш, һарымһаҡта А витамины күп, ул күреү һәләтенә йоғонто яһай, РР витамины депрессия һәм йоҡоһоҙлоҡтан һаҡлай, О витамины фосфор һәм кальцийҙы үҙләштереүгә булышлыҡ итә. Һарымһаҡта ла, һуғанда ла фитонцидтар күп, ул күп вирустарҙы юҡҡа сығара.

■ Артыҡ таҙалыҡ яратыу депрессияға алып килә, ти Америка ғалимдары. Йортто, эш бүлмәһен таҙартҡанда төрлө вирустар менән бергә кешегә кәрәкле бактериялар ҙа юҡҡа сыға. "Файҙалы" бактериялар иммунитетты нығытыу, организмдың шешеү процестарына ҡаршы тороу һәләтен арттырыу өсөн кәрәк. Бындай бактериялар етерлек кимәлдә булмауы баш мейеһе эшмәкәрлегенә зыян итә. Тәү сиратта, мейе серотонин - "бәхет гормоны" бүлеп сығармай башлай, был кешенең кәйефенә нығ йоғонто яһай. Депрессия кешенең иммун системаһына бәйле. Кеше үҫкән һайын уның иммунитеты ла нығый, шуға ла бәләкәйерәк саҡта ни тиклем күберәк вирустар менән "таныша", шул тиклем депрессия хәүефе лә түбәнәйә. Шуға ла экологик яҡтан таҙа төбәктәрҙә йәшәүселәр депрессияға йышыраҡ бирелә.

## МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ

**Йәй ташы тураһындағы тарихты мин тәүге тапҡыр өләсәйемдән ишеттем. Миңә ул саҡта ун йәш тирәһе булғандыр. Бәкмал Мансур ҡыҙы, әсәйемдең әсәһе, 1898 йылда тыуған. Уны Һаҡмар буйында, Ирәндектең арьяғында-бирьяғында йәшәгән бөтә халыҡ белде һәм хөрмәтләне. Башҡорттарҙың арҙаҡлы шәхестәре Мөжәүир хәҙрәт, Әнүәр мулла, Шаһишәрип дәрүиш, Түбә ҡасабаһында йәшәгән атаҡлы урыҫ Блещенко, халыҡ табибы мәрйә Полина һәм башҡа бик күптәр унда туҡтап, йоҡлап, ҡымыҙ эсеп йөрөнө. Өләсәйемдең күңеле киң, йөҙө яҡты, һүҙе бөтмәҫ булды. Урыҫ менән дә башҡортса һөйләшһә лә, тегеләре уны иғтибар менән тыңлап, үҙҙәренсә нимәлер һөйләй торғайнылар. Хәйер, ҡунаҡсыл кешенең һүҙҙәренә кем иғтибар итһен инде - бөтә булмышы, тойғолары уның йөҙөнә яҙылған була бит. Оҙаҡ ҡына йәшәне өләсәйем - йөҙҙө тултырыуға ике йыл ғына ҡалғас, беҙҙең аранан китеп барҙы.**

# ЙӘЙ ТАШЫ МАЖАРАЛАРЫ



Уның һөйләгәндәренән ике риүәйәт бигерәк тә иҫтә нығ ҡалған. Уларҙың береһе Һаҡмар ятыуының төбөндә йәшәгән һыу һыйырҙары хаҡында булһа, икенсеһе мөгжизәле йәй ташы тураһында ине. Йәй ташы хаҡындағы хикәйәт миңә шундай оҡшаны - уны хатта таҫмаға яҙып алдым. Яҙған ваҡытта өләсәйемә туҡһан алтынсы йәш киткәйне. Аҙна элек яңынан тыңлағайным - тауышы шундай көр, хәтере шундай теүәл - иҫ китмәле. Ошо мәҡәләне яҙған ваҡытта хикәйәтте яңынан ишетеп, күңелем тулып китте. Бынан йөҙ ҙә ун ете йыл элек тыуған кешенең телмәрен башҡаса тыңлау мөмкин түгелдер ул! Был мәҡәләмдә мин йәй ташы менән бәйле тарихҡа туҡталып китмәксемен.

Йәй ташы менән бәйле ваҡиға 1919 йылдың май айында була. Өләсәйем, ул мәлдә егерме бер йәштәге ҡатын, көйәнтә-биҙрәләрен алып, Саҡмағош йылғаһына юллана. Көмөш һыулы бәләкәй генә йылға ул Саҡмағош. Ҡуяндар ауылынан үрерәк бер генә ауыл да булмағанлыҡтан, халыҡ ғүмер баҡый шунан алып һыу эсте, балығын тотто һәм һыу инде. Быны мин шуның өсөн тәфсирләп яҙам, сөнки йәй ташының ҡайҙан килеп сығыуы, ҡайҙа "йәшәүе" әлегәсә сер булып ҡала. Фәҡей ағайымдың, Бәкмал өләсәйемдең өлкән улының, һөйләгәндәренән сығып, шуны белдем - үтә күренмәле һыуҙарын көнбайыш табан ашыҡмайынса ғына ағыҙған Саҡмағош йылғаһы Баҙар саҡаһы эргәһендәге ҡулдән башланып китә икән. Алтынбай - ҡул ошо исемде йөрөтә. "Нишләп ҡулға шундай исем биргәндәр?" тип һораным мин ҡул тураһында тәүге ишеткән саҡта. "Ошо ҡулда Алтынбай исемле мулла батып үлгән", - тип шыбырланы миңә ағайым. Уның ҡәҙимгә генә һөйләшеп торған ерҙән ҡапыл шыбырлауға күсеүенең сәбәбен аңлап етмәнем, сөнки бәләкәй инем әле.

Өләсәйемдән тыуған ағайҙарымдың, улар бөтәһе лә мәрхүм инде, һөйләгәндәренән сығып, ҡулде мин ошо рәүешле күҙ алдыма килтерәм. Был ҡул ҡәҙимгә һыу яткылығына оҡшамаған. Арҡырыға тар ғына - йүгереп килеп ырғыһа, өлкән кеше бер ярынан икенсе ярына һикереп сығала. Оҙонлоғо күпмелер, әйтә алмайым - ярайһы ғына оҙон булырға тейеш ул. Алтынбай ҡуле бик тәрәнгә киткән ер ярығы булып килеп баҫа минең күҙ алдына. Һыуы ҡара күк төҫтә булырға тейеш. Халыҡ уны төпһөҙ тип иҫәпләй.

Минең ике ағайым - Әхиәр менән Әхтәм - ҡулдең тәрәнлеген тикшереп ҡарамаҡсы була. Картуф еренең кәртәһенән бер һайғауҙы алып, шул ҡулгә киталәр. Өҫ-дүрт урында һыуға батырып ҡарайҙар, әммә төбөнә етә алмайҙар. Һайғауҙың оҙонлоғо байтаҡ - һигеҙ аҙымдан да кәм булмай. Шул йөрөгәндәрендә ағайҙарым бер суртан күреп ҡала - уның оҙонлоғо үҫмер баланың буйына торошло була. Үҙен бимазалап йөрөгән егеттәргә уҫал күҙҙәре менән текләп тора ла, ҡара күк төҫтәге тәрәнлеккә инеп юғала. Суртан ырҙтына үҫкән үләндәрҙең ҡыйған кеүек сайҡалып ҡалыуын ғына күреп өлгөрә ағайымдар.

Иҫемдә ҡалғандарҙы шуның өсөн тәфсирләп һөйләйем - өләсәйемдең мажараларына 2019 йылда бер быуат тула. Ниәтем шундай: бер йәйҙе шул тылсымлы ташты эҙләүгә бағышлау. Сәйәхәтем уңышлы булырға тейеш, сөнки Алтынбай ҡуле лә, Саҡмағош йылғаһы ла ошо оҙайлы ваҡыт эсендә бер ниндәй үҙгәреш тә кисермәне. Дуҫым Юлай менән Саҡмағош эргәһендә йоҡлағанда шуға иғтибар иттем - уның һыуы кәмемәгән. Хатта артҡан кеүек тойолдо, сөнки Ҡуяндар ауылы юҡҡа сыҡҡас, туғайҙарҙы мал тапауҙан туҡтаған. Һыуы ла үтә күренмәле - хәүефләнмәйенсә ятып эсергә була.

Хәҙер өләсәйемә кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Ул Саҡмағошҡа эсеү өсөн һыу алыу ниәте менән килгәйне. Бер биҙрәне тултырып, өҫкәрәк мендереп ҡуя ул. Икенсе биҙрәһен тултырмаҡсы булып, һыуға әйелә. Шул саҡ ниндәйҙер йән әйәһенме, әллә таштымы күреп ҡала. Таш тип әйтер инең, ҡайһы саҡта өҫкә күтәрелеп китә, тәлмәрйен тип әйтер инең, аяҡтары, башы юҡ. Уның аҫ яғы аҡһыл төҫтә, өҫ яғы йәшкелт төҫтә була. Ваҡыты-ваҡыты менән ул йә әйләнеп китә, йә сумған кеүек хәрәкәттәр яһай. Ни булһа ла, ҡыуанып йөрөгән балыҡты ла, терелеп киткән ташты ла хәтерләтә ул. Өләсәйем серле таштың өҫкәрәк ҡалҡыуын көтөп тора ла тегене ҡунәгенә һоҫоп ала.

Ташты һыу эсенән сығарып, ҡулына алыуы була, көн торошо ҡапыл үҙгәрә. Донъя ҡараңғылыҡҡа сума: көслө дауыл ҡуба, томан кеүек нәмә бөтә ерҙе солғап ала. Шул саҡта өләсәйем иҫен юғалта - дауылдың ике биҙрәһен төрлө яҡҡа ырғытып бәреүен генә күреп өлгөрә ул. Иҫе уға өйөндә генә кире ҡайта. Ҡайтыу юлын нисек үткәнен ул бөтөнләй иҫләмәй. Уң ҡулында нығ итеп ҡыҫылған таш булыуын ғына тоя ул. Биҙрәләрен, көйәнтәһен һыу буйында ҡалдырып киткәнен аңлай.

Дауыл иһә ҡотороноуын дауам итә. Өләсәйемдең күҙ алдында көслө ел тәҙрә ҡапҡастарын, рамдарын йолҡоп алып, селпәрәмә килтереп, ергә ҡуша һуға. Йәш ҡатын нығ ҡурҡа: ҡулындағы ташын урындыҡҡа ырғыта ла, ҡайныһы йәшәгән йортҡа йүгерә. Өләсәйемдең ире, минең олатайым, был ваҡытта әйрәтелгән ыласыны менән һунарға киткән була. Тәбиғәттең ҡапыл үҙгәреп китеүенең сәбәбен йәй ташы менән бәйләү өләсәйемдең башына ла инмәй. Ҡайныһының өйөнә килеп ингәндә, төш ауған була. Намаҙға әҙерләнеп йөрөгән ҡайныһы, эштәрен ташлап, килененең йортона ашыға. Тырым-тырағай ятҡан рамдарға ҡарап, башын бер аҙ сайҡап торғандан һуң, эшкә тотона. Ватылған өлгөләрҙең ҡайһыларын ҡарындыҡ менән ҡаплап, бәғзеләрен ярылған быялалар ярҙамында бөтәштереп, рамдарҙы кире урынына ҡуя. Был мәлгә ел тыма төшә, ә өләсәйем ҡәҙимге хәленә ҡайта башлай. Әммә ямғыр яуыуын дауам итә.

Урал айының, хәҙергесә июнь айының башында ырыу йәйләүгә сыға. Ямғыр туҡтамай ҡойһа ла, ғаиләләр көс хәл менән тирмәләрен ҡороп, шунда йәшәй башлайҙар. Һауып алған һөттө эшкәртеү бик ауырға төшә. Ул заманда һөт айырғыс булмағанлыҡтан, ҡаймаҡ эшләү өсөн һөттө ҡайната торған булғандар. "Тәкәтте шундай ҡоротто ямғыр, - тип һөйләгәне иҫемдә өләсәйемдең, - асыҡ ҡаҙандарға һыу тула ла ҡуя торғайны". Ошондай шарттарҙа бер ай яфа сиккәндән һуң, халыҡ, тирмәләрен һүтеп алып, ауылға яҡыныраҡ урынға күсеп килә.

Яңы йәйләүҙә эштәрен бөткәс, йортҡураһының хәлен белеү өсөн өләсәйем йортона ҡайта. Инһә, ҡайны ҡартты һәм өҫтәл артында ултырған Лоҡман исемле ғалим кешене күрә. Алдында ятҡан ҡалын китапты өйрәнеп ултырған була ғалим кеше. "Килен, дауыл сыҡҡан көндө иҫләйһеңме? - тип өндәшә уға иренең атаһы. - Мине өйөңә саҡырғайның. Шул килгәнемдә урындыҡта бер таш күргәйнем. Ул ябай таш булып сыҡмаған, ә йәй ташы булған. Шул ташты урынына кире илтеп һалмайынса, ҡойма ямғырҙан ҡотолоп булмай. Лоҡман ағай боронғо китаптан уҡып шуны әйтте. Тәмәстән вазифалы кешеләр килгән. Уларға йәйге ташты урынына алып барып һалыуҙы ойошторрoу бурысы йөкмәтелгән. Быны һин үҙең эшләргә тейешһең".

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Ғәҙәттә, беҙ мәтрүшкәле сәй эсәбеҙ. Шулай уҡ сейә, ҡарағат япраҡтары ла ҡушыла. Йәшел сәй тип, ҡытайҙарҙың сәйен эскәнсе, үҙ ҡулдарыбыҙ менән йыйып, әҙерләп алған һәм күпкә шифалыраҡ үлән сәйҙәрен эсергә була бит.*

ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!

# ҮҘ РИЗЫҠТАРЫБЫҘҒА...

## йәнебеҙ ҙә тартыла бит

**Башҡорт ғаиләләрендә элек-электән килгән йолаға ярашлы, беҙ, дүрт бер туған, форсат сыҡҡан һайын бергә йыйылып, аралашып йәшәйбеҙ. Балаларыбыҙ ҙа бер-береһен танып, бер-береһенә таяныс, ярҙамсы булып үҫеп килә.**



Бергә йыйылғанда мотлаҡ мул итеп табын әҙерләйбеҙ. Был эштән бер генә ғаилә ағзаһы ла ситтә ҡалмай, һәр кем нимәгә һәләте бар - шул эшкә егелә. Ғәҙәттә, миңә өҫтәлгә матур итеп һауыт-һаба теҙеү эше йөкмәтелә. Өлкән апайым аш бешерә. Әйтергә кәрәк, башҡорт аштары беҙҙең табындың иң төп ризығы. Аштың һурпаһы тәмле килеп сыҡһын өсөн бер нисә төрлө, мәҫәлән, һыйыр, йылҡы һәм ҡаҙ иттәрен ҡушып бешерәбеҙ. Ашты мотлаҡ ҡоротлап эсәбеҙ, шуға үҙебеҙ эшләгән ҡорот һәр ваҡыт ҡул аҫтында. Бындай һурпа бик файҙалы, ҡышҡы һыуыҡта өшөтмәй, яҙғы осорҙа организмды витаминдар ҡытлығынан һаҡлай.

Аштан һуң табынға духовкала бешерелгән ҡаҙҙы килтерәбеҙ. Был да бергә йыйылғанда беҙҙең табынға мотлаҡ ҡуйыла торған аштарҙың береһе. Десертҡа ла үҙебеҙсә, башҡортса тәмлекәстәр әҙерләйбеҙ. Апайымдың иҫ киткес тәмле итеп әҙерләнгән ҡарағат, еләк, алма ҡағын барыбыҙ ҙа яратабыҙ. Ҡыҙыл эремсек тултырылған алмалар, талҡан, ҡыҙыл ҡарағат һәм абрикостан әҙерләнгән мармелад, сейәле май ҙа төп десерт беҙҙең табында.

Бер байрам табынын да ҡаҙы, ҡаҙылыҡ, тултырмаһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Элек өләсәйем был аштарҙы шул тиклем оҫта бешерә торғайны, беҙ инде йышыраҡ һатыуҙағы продукцияны файҙаланабыҙ. Ә бына тултырманы үҙебеҙ эшләйбеҙ. Миңә бауыр һәм дөгө ярмаһы ҡушылған тултырма оҡшай. Элек өләсәйем һуйған саҡта малдың ҡанын алып ҡалып, шуны ла тултырмаға тултыра торғайны. Ул шул тиклем тәмле, үҙенсәлекле, йомшаҡ килеп сыға, тәме һаман да тел осонда торған кеүек. Әммә был рәүешле әҙерләнгән тултырманы хәҙер ашағаным юҡ, үҙем эшләп ҡарарға форсат табылмай. Беҙҙең Учалы районы ауылдарында ла ҡан ҡушып бешерелгән тултырма осратҡаным юҡ. Уйлап ҡараһаң, башҡорт халҡы мал һуйғанда уның бер генә өлөшөн дә әрәм итмәгән, һәр өлөшөнән тәмле, файҙалы ризыҡ әҙерләгән.

Табындың муллығы хужабикәнең уңғанлығынан, һаҡсыллығынан торһа, уның йәме - самауырҙа. Күмәкләп йыйылғанда самауыр ҡайнатып, оҙаҡ ҡына ултырып сәй эсергә яратабыҙ. Шуға күрә, хуш еҫле, тәмле сәй эшләүгә лә оло иғтибар бүләбеҙ. Ғәҙәттә, беҙ мәтрүшкәле сәй эсәбеҙ. Шулай уҡ сейә, ҡарағат япраҡтары ла ҡушыла. Йәшел сәй тип, ҡытайҙарҙың сәйен эскәнсе, үҙ ҡулдарыбыҙ менән йыйып, әҙерләп алған һәм күпкә шифалыраҡ үлән сәйҙәрен эсергә була бит. Мәтрүшкә, ҡарағат һәм сейә япраҡтары һалып ҡайнатылған сәй һыуынғас та тәмһеҙләнмәй, һыуһын ҡандырыуға шәп. Ҡоймаҡ, сәк-сәк, йыуаса, ҡош теле кеүек тәмлекәстәргә, бал һәм йәй тәмен йыйған төрлө емеш-еләк ҡайнатмаларына ҡушып сәй эсеүе үҙе бер ғүмер.

Эштән буш саҡта улым менән иремде ҡала халҡы өсөн онотолоп барған башҡорт аш-һыуҙарын яраштырып һыйлап алам. Шуға күрә, һуғым малының баш-тояғын, эсәк-ҡарынын бер ваҡытта ла ташлатмайым. Береһенән ҡойҡа, икенсеһенән тәмле бөйөрәктәр бешерәм. Әҙләп һәм һирәк бешерелгән затлы ризыҡтар танһыҡ була, һә тигәнсе тәмләп ашап бөтөрәбеҙ. Ғөмүмән, балалар ҡамыр аштарын бик ярата, уларға ваҡ бәлеш, өсбосмаҡ, гөбәҙиә, төрлө күмәстәр оҡшай. Мин, ғәҙәттә, ваҡ бәлеш, өсбосмаҡ йә гөбәҙиә эшләп, бешерелмәгән көйөнсә туңдырғысҡа һалып ҡуям. Был рәүешле уларҙы бер ай һаҡларға була. Ҡапыл ҡунаҡ килеп төшһә йәки бик ашығыс ваҡытта уларҙы һыуытҡыстан сығарып, бүлмә температураһында 10-15 минут иретеп алып, духовкаға ҡуйып бешереп алаһың.

Хәҙерге заманда, байрам табынына әллә ниндәй затлы, йәнең теләгән сит ил ризыҡтары әҙерләргә, һатып алырға була. Күптәр шулай итә лә, йәғни оҙаҡ ваҡыт талап итмәгән, еңел генә әҙерләнә торған ашамлыҡтар бешереүгә, салатфәләнгә өҫтөнлөк бирә. Шулай ҙа байрам көндәрендә үҙебеҙҙең башҡорт милли аш-һыуҙарын бешереп, яҡындарыбыҙҙың күңелен күреү ҡалай матур күренеш. Ни тиһәң дә, ҡорһағыбыҙ ғына түгел, йәнебеҙ ҙә тартыла бит үҙ ризыҡтарыбыҙға.

**Рита АБДРАХМАНОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Дүртенсе сер: ыңғай ғәҙәттәр формалаштырыу программаһы

Тормошоғоҙға кире йоғонто яһаған элекке насар ғәҙәттәрегеҙҙе алмаштырыу өсөн ошо программаны файҙаланығыҙ.

**Беренсе аҙым**

Түбәндәге һорауҙарға яуап яҙығыҙ.

- Ниндәй кире ғәҙәтегеҙҙе алмаштырырға теләр инегеҙ?
- Элекке ғәҙәтегеҙҙе алмаштырыу өсөн ниндәй ыңғай ғәҙәт формалаштырырға теләйһегеҙ?
- Кире ғәҙәтегеҙҙе алмаштырыу өсөн ниндәй ғәмәлдәр эшләйһегеҙ?
- Бының өсөн ниндәй ысул иң ябайы һәм аңлайышлыһы?

**Икенсе аҙым**

- Элекке ғәҙәттәрегеҙҙән уңышлы арындыҡ һәм уны яңыһына алмаштырҙыҡ тип күҙаллағыҙ; яңы ыңғай ғәҙәт тормошоғоҙға күпме өҫтөнлөктәр килтерҙе.
- Визуалләштереүҙе ыңғай раҫлау менән нығытығыҙ (раҫлауҙар менән ентекләберәк һуңыраҡ танышырһығыҙ).

**Өсөнсө аҙым**

Ғәмәлдәрегеҙҙе күҙәтегеҙ һәм вәғәҙәгеҙҙе үтәмәгән һәр осраҡты теркәп барығыҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, бер ваҡытта ла үҙегеҙҙе ғәйепләмәгеҙ һәм әрләмәгеҙ. Бары тик фактты теркәгеҙ һәм үҙегеҙгә төҙәтеүҙәр индереү мөмкинлеген бирегеҙ.

**Дүртенсе аҙым**

Кәм тигәндә яҙмаларығыҙҙы 21 көн дауамында алып барығыҙ. Аңлы рәүештә яңы ыңғай ғәҙәт булдырығыҙ, был дүрт аҙым уны төпкө аңға индерергә ярҙам итер. Тиҙҙән ул ирекһеҙ яуап ғәмәле булыр.

Әгәр төрлө тормош ваҡиғаларына кире ҡараштаһығыҙ икән, яуап ғәмәлдәре үҙегеҙҙе тап шулай тойорға һәм нисек программалағанһығыҙ, шулай эшләргә мәжбүр итәсәк.

